✓ *Яҡшылыҡ менән яманлыҡ бер булмаҫ. Яманлыҡты игелеген менән баҫ. Ул саҡта һинең дошман күреп йөрөгән кешең дә дуҫың кеүек яҡын була башлар, арағыҙҙа дошманлыҡ бөтөр, дуҫ булып ҡалырһығыҙ. Был сифаттар сабыр кешеләргә бирелә.*

**"Мосолман шәхесе" китабынан.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16 - 22 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№24 (494)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәйәүлегә лә...**

урам кәрәк



4

**Байрам саралары...**

рухыбыҙ менән таныштырҙы



5

**Милли балет ҡуйһам...**



ул мотлаҡ Урал батыр тураһында буласаҡ

11

**Өй һалды, ағас ултыртты...**



ул-ҡыҙҙар үҫтерә...

12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ике быуат ярымдан һуң да Салауат күңел түребеҙҙән төшмәгән геройыбыҙ булып ҡала. Ә ҡайҙа һуң беҙҙең бөгөнгө заман геройҙары?

***Закирйән ӘМИНЕВ, ғилми хеҙмәткәр:*** Һәр замандың үҙ геройҙары була. Бөгөнгө көндә Салауатҡа тиң геройҙар юҡ, тип әйтә алмайым, ундай шәхестәр бар ул, ләкин улар аныҡ бер экстремаль хәл килеп тыуған осраҡта ғына ҡалҡып сығыуы ихтимал. Әлегә, мин уйлайым, ундай ихтыяж тыумаған. Башҡорт бит ул сая, дәртле, азат рухлы халыҡ, тәбиғәте менән уға экстремаллек хас, уның эске потенциалы ҙур, тимәк, әгәр мохтажлыҡ килеп тыуа икән, ул үҙ араһынан быңамын тигән улдарын күтәреп сыға аласаҡ. Был, ғөмүмән, һәр халыҡҡа ла хас сифат, тип әйтер инем. Хәтерегеҙгә төшөрһәгеҙ, Зәки Вәлиди дәүеренән 20-25 йылдар элек кенә бит әле Успенский, башҡорт бөтә, тип яҙып сыҡҡайны, ә күп тә үтмәне, халыҡ араһынан уның азатлығы, рухы өсөн күтәрелгән Вәлиди, Бабич, Мортазин һәм башҡа батырҙарыбыҙ ҡалҡып сыҡты. Салауатҡа тиң булырҙай рухлы, талантлы шәхестәребеҙ йәштәр араһында ла барҙыр, шикләнмәйем, әммә, һәр бер тере организм кеүек үк, халыҡтың да үҙ-үҙен һаҡлау инстинкты сая баштарҙы тыйыбыраҡ торалыр, тип уйлайым. Былай ҙа бит бик ныҡ ҡырыуға дусар ителде лидерҙарыбыҙ. Иң аҫыл ир-егеттәребеҙ 1937 йыл аяуһыҙ репрессияға дусар ителде, унан Бөйөк Ватан һуғышында ҡырылды. Фәнни тел менән әйткәндә, һәр халыҡ донъяһының үҙ моделе була. Беҙҙең халыҡтың донъя моделе заманында Рәсәй империяһы тарафынан туҙҙырылған. Держава үҙенә ҡулай һәм яраҡлаша белгән кешеләрҙе генә үҫтергән. Ә Салауат ул тәбиғи герой, халыҡ ихтыяждарын һәм мәнфәғәттәрен яҡлаусы уның бер вәкиле. Башҡорт донъяһы моделе бөтөрөлөп, баҫтырылып килгәнлектән, 19-сы быуаттан алып беҙҙең тәбиғи рәүештә үҫә килгән аристократ ҡатламы - элитабыҙ ҙа юҡҡа сығарылған. Һәләтле шәхестәребеҙ күп ул, ләкин, әйтеүемсә, Рәсәй дәүләте уларҙы иләк аша үткәреп, үҙенә баш баҫып, өнһөҙ-тынһыҙ хеҙмәт итерҙәйҙәрен генә һайлап ала, уға халҡы ихтыяждары менән янып-көйөүсе лидерҙар кәрәкмәй, шуға ла уларҙың башына һуғып ҡына торалар.

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы "Көнгәк" район гәзите мөхәррире:*** Башҡорт халҡы 1662-1773 йылдар арауығындағы 111 йыл эсендә 89 тапҡыр восстаниеға күтәрелә. Етәкселәренең береһе Салауат булған 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы айырыуса аяуһыҙлыҡ менән баҫтырыла. Халыҡты физик яҡтан язалау һәм ҡырыу ғына түгел, идеологик яҡтан да эшкәртеүгә тотона батша власы. 1789 йылда Башҡортостанда Рәсәй мосолмандары Диниә назараты төҙөлә. Шулай итеп, башҡорттарҙы дин аша ла баҫтырырға, күндерергә тырыша власть. Ниндәйҙер ваҡытҡа, Юғары көстәр тарафынандыр ҙа, күрәһең, халыҡтың ҡырылыуы бер аҙға туҡтатылып тора. Башҡорттарҙың ҡыйыулығын, ил һаҡлауҙа фиҙаҡәрлеген яҡшы белгән власть әһелдәре быны артабан да файҙаланыуын дауам итә. Мәҫәлән, әгәр 1917 йылда Башҡорт армияһы Лениндың саҡырыуы буйынса Петроградҡа бармаһа, революция еңелер ине. Шунан алып бер 10-15 йыл үткәс, әлеге башҡорт һуғышсылары ҡаты репрессияға дусар ителә башлай. Ә Сталиндың шәхес культы заманында ҡырылған лидерҙарыбыҙҙың һанына ла сығырлыҡ түгел бит! 1941 йылда башҡорттар фашистарға ҡаршы, бығаса бер ҡайҙа булмағанса, үҙҙәренең атлы дивизияһын төҙөп һуғыша, ләкин ниндәй генә ҡаһарманлыҡ өлгөһө күрһәтһә лә беҙҙең хәрби етәкселәргә полковниктан юғары чин бирелмәй. Был да шул баҫымсаҡлау, "башҡа һуғыу" ысулдарының береһе. Нисек кенә булмаһын, һәр замандың үҙ геройҙары, лидерҙары тыуып тора, шөкөр. Бөгөнгө көндә лә бар ундай шәхестәребеҙ, тик беҙ бөгөнгө батырҙарыбыҙҙы яҡлай, һаҡлай, күтәрә белмәйбеҙ. Беҙҙә лидерҙарҙы һаҡлап алып ҡалыу һәләте юҡ. Икенсе яҡтан, әгәр кемделер лидер итеп ҡарай башлаһаҡ, уның эргәһендә мотлаҡ уны фашлап, ошаҡлап, тоттороп ебәрергә әҙер шымсылар пәйҙә була. Хәҙер, әлбиттә, ҡылыс һелтәп көрәшә торған заман түгел, аҡыл, белем һәм рух ҡеүәте менән идара итеүсе лидерҙар кәрәк беҙгә. Ундай шәхестәребеҙ ҙә юҡ түгел арабыҙҙа, тик уларҙы ваҡытында күрә, һаҡлай беләйек, күтәрәйек, ҡалҡан булайыҡ уларға, шунда ғына беҙ үҙебеҙ ҙә яҡлаулы булырбыҙ.

(Дауамы 2-се биттә).

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

# ЯУЛАНЫҠ, ТИП, ПАРИЖДЫ...

## тынысланыу фарызмы?



Материалды 6-сы биттә уҡығыҙ.

*✓ Геройҙарҙы халыҡ һәм шарттар тыуҙыра. Бында бигерәк тә халыҡтың роле көслө. Ә инде бөгөн батыр рухлы шәхестәребеҙ юҡ, тиһегеҙ икән, бында беҙ бөтәбеҙ ҙә ғәйепле.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЯЛ ДА ИТӘМ...
## аҡса ла эшләйем

**Мин Башҡортостандың иң матур һәм күркәм төбәктәренең береһе - Бөрйән районынан. Был төбәктең матурлығын һөйләп аңлатып булмай, тик үҙ күҙҙәрең менән күреп кенә уның бөйөклөгөн аңларға мөмкин. Шуға күрә йылдың һәр миҙгелендә лә Бөрйәнгә килеүселәр һанап бөткөһөҙ. Айырыуса йәй туристарға бай осор. Улар араһында данлыҡлы Шүлгән мәмерйәһен күрергә килеүселәр һәм Ағиҙел йылғаһынан кәмәлә ағып төшөүселәр күп.**



Сит төбәк ҡунаҡтары төрлө туристик фирма аша ял итергә килһә, республика һәм күрше төбәк халҡы араһында "ҡырағай" ял итеүселәр күберәк. Улар билдәләнгән маршрут буйынса ғына түгел, ә үҙҙәренең ваҡыты, теләге һәм мөмкинлектәренән сығып сәйәхәт итергә ярата. Ләкин йылға буйлап ағып төшөү һүҙҙә генә рәхәт һәм хәүефһеҙ, ә ысынында иһә бындай юлға сығыусы һәр бороложтан һуң, һәр ҡая артында ҡурҡыныс көткәнлеген иҫенән сығармаҫҡа тейеш, сөнки ҡарар күҙгә тыныс ҡына булып күренгән йылғаның "характеры" ҡатмарлы. Ҡайһы урында йылғаның уртаһынан, икенсе осраҡта, киреһенсә, яр ситенә һыйынбыраҡ ағырға, ниндәй ҡаяны алыҫтан урап үтергә һәм ниндәй урындарҙа туҡталҡалар эшләргә мөмкин икәнлеген белмәйенсә тороп, юлға сыҡмауың хәйерле. Шулай уҡ күптәр тирә-яҡҡа һоҡланып ҡына ағып барыуҙы үҙһенмәй, ә ошо урындарға ҡағылған тарих һәм легендаларҙы ла ишетергә теләй. Нәҡ улар өсөн мин үҙемдең хеҙмәтемде тәҡдим итәм дә инде, йәғни улар менән бергә йылға буйлап ағып төшәм, шул ыңғайҙа барыһын да күрһәтәм, һөйләйем, аңлатам һәм хеҙмәтем өсөн аҡса алам. Хаҡтар ағып төшөү арауығының оҙонлоғона бәйле. Минең яңы таныштарым ошондай хеҙмәт күрһәтеүсе кеше барлығын үҙ дуҫтарына, туғандарына һөйләй һәм улар ҙа, кәрәк булғанда, нәҡ миңә мөрәжәғәт итә, был иһә йылдан-йыл клиенттарым артыуға булышлыҡ итә.

Шулай итеп, йәйге ялым күңелле һәм файҙалы үтә. Республикабыҙҙа ял итеү урындары, ағып төшөр йылғалар күп. Бәлки, минең тәжрибәм кемгәлер бер аҙ аҡса эшләргә этәргес булыр.

**Рөстәм ХӘЙРУЛЛИН.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Ике быуат ярымдан һуң да Салауат күңел түребеҙҙән төшмәгән геройыбыҙ булып ҡала. Ә ҡайҙа һуң беҙҙең бөгөнгө заман геройҙары?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Мирас ИҘЕЛБАЕВ, БДУ профессоры, яҙыусы:*** XVIII быуатта ер, аҫабалыҡ мәсьәләһе киҫкен тора, башҡорттарҙың ерҙәре тартып алына башлай, шундай түҙеп торғоһоҙ шарттарҙа халыҡ күп тапҡырҙар ихтилалдарға күтәрелә - уларҙың етәкселәрен тарихтан бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. Салауат - ана шуларҙың береһе һәм лидерлыҡ сифаттары унын ҡанында булған: олатаһы, атаһы әүҙем сәйәсәт менән йәшәгән. Салауат бәләкәйҙән ғәҙелһеҙлектәрҙе күреп йөрөгән. Ул замандарҙа йәшәгән башҡорттарҙың менталитеты бөтөнләй икенсе булған: уларҙа аҫабалыҡ тойғоһо көслө була, унын ғәҙелһеҙлектәргә түҙеп торғоһоҙ яугир сифаттары ла беҙгә яҡшы мәғлүм. Хәҙер ҙә, әлбиттә, ер мәсьәләһе киҫкен тора. Ерҙәрҙең кем ҡулына киткәнлеген дә белмәй ҡалабыҙ йыш ҡына. Халыҡта битарафлыҡ көслө, үҙ хоҡуҡтарыбыҙ, аҫаба ерҙәребеҙ өсөн көрәшмәйбеҙ. Геройҙарҙы халыҡ һәм шарттар тыуҙыра. Бында бигерәк тә халыҡтың роле көслө. Ә инде бөгөн батыр рухлы шәхестәребеҙ юҡ, тиһегеҙ икән, бында беҙ бөтәбеҙ ҙә ғәйепле. Телен дә, тарихын да, мәҙәниәтен дә белмәгән балаларыбыҙҙан ниндәй лидер сыҡһын? Лидерлыҡтың нигеҙе барыбер ҙә рух икәнен бер кем дә инҡар итмәҫ бит...

***Мәхмут ХУЖИН, журналист:*** Был һорауға яуапты, миңенсә, тарихи, ижтимағи-сәйәси һәм демографик күҙлектән сығып эҙләргә кәрәк. Сөнки Салауат йәшәгән 18-се быуат башҡорттарының ижтимағи хәлен хәҙергеһе менән бер нисек тә сағыштырып булмай. Аҫаба башҡорттар үҙ ерендә үҙ мәртәбәһен белеп көн иткән, һәм ул шарттар боҙола башлау менән үҙ ихтыярын күрһәткән. Бөгөн иһә йәмғиәттә ихтыярһыҙлыҡ хөкөм һөрә. Уның да сәбәптәре билдәле - күсеү осоронда йәшәйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта бөгөн салауаттарға ихтыяж да юҡ. Әйтәйек, ул ниндәй саҡырыу иғлан итә ала? Экология буйынса ниндәйҙер саралармы? Уларҙы бер кем дә ишетмәйәсәк. Милли проблемалармы? Халыҡты туплау өсөн ниндәй ауаз кәрәклеген мин, мәҫәлән, күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ғөмүмән, бөгөн беҙгә салауаттар түгел, ә дипломатияны яҡшы үҙләштергән, һалҡын ҡан менән эш иткән, "башында батшаһы булған" шәхестәр кәрәк. Улар юҡ тип әйтергә ашыҡмайыҡ, күрәһең, ҡалҡып сығырға ваҡыты етмәгәндер.

***Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, хаҡлы ялдағы педагог:*** Салауатты онотмайбыҙ, уны оноттора ла алмаясаҡтар, ләкин беҙгә бит рухи ныҡлыҡ яғынан уға тиңләшерҙәй шәхестәр тәрбиәләү һәм үҫтереү фарыз, һәр заман үҙ лидерын көтә. Республикабыҙға үҙаллылыҡ яулап, бер аҙ ғына тын алып, рухи яҡтан күтәрелеп бара инек - тағы хәүеф... Күп ауылдарҙа мәктәптәр ябыла башланы - быны нисек аңларға? Заман байҙарының балалары сит илдәрҙә, йә айырым элиталы мәктәптәрҙә белем ала. Беҙҙекеләр, йәғни ауыл балалары, күрше ауылдарға йөрөп уҡырға йә булмаһа район үҙәгендәге интернатта аслы-туҡлы ятып белем алырға мәжбүр. Ошо балаларҙан нисек итеп илһөйәрҙәр тәрбиәләмәк кәрәк? Күрмәй, аңламаймы ни улар мәктәптәр ябылыуы ҡот осҡос сәйәсәт икәнлеген? Кешелек сифатын билдәләүсе баһа кимәле беҙҙең балаларҙа былай ҙа түбән, өҫтәүенә, улар шулай сит мәктәпкә йөрөп уҡып, уғата кәмһенеү кисерә. Үҙен кәмһеткән кешенән лидерҙар сыға һалып бармай шул инде. Талантлы шәхестәребеҙ бар ул. Әле яңыраҡ телевизорҙан боксер егетебеҙ Денис Шафиҡовтың сығышын ҡараным, ғорурлығымдан күҙҙәргә йәш тығылды. Тағы бер батырыбыҙ Хәбир Сөләймәнов хаҡында ла күп яҙылды. Беҙҙең үҙ һүҙҙәрен күҙгә ҡарап ҡыйыу әйтә алған тарихсыларыбыҙ, журналистарыбыҙ, бер-нисә яҙыусыбыҙ бар, ләкин уларҙың алдында ла ҡаршылыҡтар тыуып ҡына тора. Бер-беребеҙҙе ҡәҙерләргә, яҡларға, ҡурсырға өйрәнһәк ине киләсәктә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте ярһытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтырға онотоп ҡуймағыҙ.**



Июндә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәреүселәрҙе лә бүләктәр көтә: 3 кеше - башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим" китабына, 3 кеше "400 башҡорт халыҡ йыры", 3 кеше Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", ҡалғандар иһә "Айыҡ туй сценарийҙары" китаптарына эйә буласаҡ.

• Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе** лә хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һыҡтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **234 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. 2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мәскәүҙә эшлекле осрашыу барышында Владимир Путин һәм Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостандың социаль-иҡтисади хәлен тикшерҙе, тип хәбәр итә Рәсәй Президентының матбуғат хеҙмәте. Рөстәм Хәмитов төҙөлөш тармағындағы уңыштарҙы һәм халыҡтың реаль аҡсалата табышының артыуын билдәләне, дәүләт башлығына бер нисә ҙур проект, шул иҫәптән Урал менән Волга буйы төбәгенең иҡтисадын үҫтереү өсөн газ сеймалы менән тәьмин итеү проекты тураһында һөйләне. Владимир Путин социаль өлкәләге эштәр торошо һәм, иң элек, эш хаҡы күләме менән ҡыҙыҡһынды.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселегендәге рәсми делегация Беларусь Республикаһына килде. Беларусь Республикаһы Президенты резиденцияһында Рөстәм Хәмитовтың Александр Лукашенко менән осрашыуы үтте. Ике республика араһында машиналар эшләү, нефть химияһы һәм башҡа тармаҡтарҙа, шулай уҡ гуманитар өлкәлә хеҙмәттәшлек мөмкинлектәре тикшерелде.

✓Халыҡ-ара Бөтә донъя уйындары ассоциацияһы президенты Рон Фройлих Өфөләге барлыҡ спорт ҡоролмаларының да яҡшы хәлдә булыуын, йәнә бындағы тәбиғәттең матурлығына хайран ҡалыуын билдәләне. Рон Фройлих ҡунаҡханалар торошона ҡарата ғына борсолоу белдерҙе - улар әле Уйындарҙың бихисап спортсыларын һәм ҡунаҡтарын ҡабул итерлек хәлдә түгел. Башҡортостан Президенты киләһе йылда уҡ Уйын төрҙәре комплексы һәм еңел атлетика манежы төҙөлөшөн, Уйындарҙың төп стадионын һыйҙырышлыраҡ итеп реконструкциялауҙы башларға, ҡыҙыҡлы һәм бай мәҙәни программа әҙерләргә вәғәҙә бирҙе.

✓Башҡортостан аграрийҙары "500 ферма" республика программаһында ҡатнашыу өсөн 56 ғариза биргән. БР Ауыл хужалығы министрлығы комиссияһы ҡатнашыусыларҙы һайлап алыу буйынса эштәрҙе дауам итә. Һуңғы конкурс һөҙөмтәләре буйынса өс предприятиеға - Федоровка районының Фрунзе исемендәге ауыл хужалығы етештереү кооперативына, Илеш районының "Илеш" МТС-ы яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенә һәм Миәкә районының "Урал" ауыл хужалығы етештереү кооперативына ҡатнашыусы статусы бирелде. Әлегә был статусты 11 ауыл хужалығы предприятиеһы алған.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҮЛЕМДӘН ОЯТ КӨСЛӨ

**"Хурлыҡтан үлем артыҡ" тип тә әйтәләр. Был әйтемдәрҙе аң менән ҡабул итер өсөн ғүмереңә, һаулығыңа хәүеф, ҡурҡыныс менән янаусы ауыр һәм сетерекле хәл алдында ҡалырға (махсус рәүештә түгел, әлбиттә) кәрәктер ул. Тик шул сағында ғына ҡаныңа яҙылған хәҡиҡәтте аңлап булалыр, тим. Психологтар билдәләүенсә, ҡанға, йәғни аҫҡы аңға яҙылған мәғлүмәтте аң-белем, ихтыяр ярҙамында ғына төшөнөү мөмкин дә түгел. Шынаны шына менән һуғып сығаралар, шуның кеүек, аҫҡы аңға, ҡанға яҙылғанды уҡыр өсөн мәғлүмәтте шундай тәрәнлеккә төшөргән хәл-ваҡиғаны үҙеңә кисереп ҡарарға кәрәктер ул. Әммә, йырҙа әйтелгәнсә: "Дуҫыма ла түгел, дошманыма ла күрһәтмәһен минең күргәнде...". Шулай ҙа тормош булғас, төрлө хәл була, маңлайыңа яҙылғанды күрәһең-кисерәһең инде. Кеше нисек кенә аҡыллы, зирәк йә хәйләкәр булмаһын, ҡайһы бер осраҡта үҙен ауыр кисерештәргә, тетрәнеүҙәргә дусар иткән хәл-ваҡиғаларҙан азат була алмай, урап үтә алмай. Аҫҡы аңға, ҡанға яҙылған тап шундай саҡтарҙа өҫкә ҡалҡып сыға. Миңә лә үҙ тормошомда ихтыярымды һынаған шундай хәлдәргә күп тапҡырҙар ҡалырға тура килде. Әрме сафында кисергән берәүһен бәйән итәйем әле, булмаһа.**



Юҡтың аты юҡ. Бала сағыбыҙҙа беҙҙең ихатала сусҡа малы йөрөмәгәс, уның итен ашау-ашамауға бәйле ололарҙың тыйыуы ла булманы. Атайыбыҙ беҙ сабый саҡта Һаҡмар буйындағы Төпөш тигән урында сусҡа фермаһында эшләүгә эшләгән, әммә танауыбыҙға еҫ инә башлағандан бирле беҙ был малдың итен ашау ғына түгел, үҙен дә күрмәй үҫтек. Шуғамылыр, булмағанды тыйып та булмай, тигән кеүек (ә тыйылмағанды рөхсәт ителә тигән аңлау ҙа бар), беҙ, совет осоронда тыуып үҫеп, әрмегә барып эләккән егеттәр, сусҡа итен ашауҙан тартынманыҡ. Әйтәйек, мин хеҙмәт иткән хәрби часта башҡа төрлө ит бөтөнләй булманы. Тыуғандан ит ашап өйрәнгәс, башҡа төрлө ризыҡ менән күпкә барып булмай, өҫтәүенә, хеҙмәттең тәүге мәлендә. Хәҙер генә ул: динебеҙ буйынса хәрәм һаналған был малдың итен әллә ҡайҙан еҫенән үк танып, ытырғаныу тойғоһо кисерәбеҙ. Әйткәндәй, дин тигәндән, бер китапта яҙылғанса, Мөхәммәт бәйғәмбәр йәшәгән дәүерҙә тәүҙә мосолмандар сусҡа итен ашаған, һуңынан уның итен ашаусылар үлемесле йоғошло ауырыуға дусар булып, күпләп ҡырыла башлағас, был ризыҡ хәрәм һаналып, дин тарафынан тыйылған. Шулай уҡ аслыҡ кеше ғүмеренә үлем менән янаған осраҡта сусҡа итенән башҡа ризыҡ булмаһа, ғүмерҙе һаҡлап ҡалыу өсөн уны ҡабул итеү рөхсәт ителә.

Оҙон тәфсиргә төшөп, сусҡа ите хаҡындағы "аҡланма" фәлсәфәне нимәгә һөйләйем һуң? Эш шунда: әрмелә саҡта сираттағы төшкө ашҡа тағы ла сусҡа итен биргәстәр, ротабыҙҙың яртыһынан күбеһен тәшкил итеүсе үзбәктәр, ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙыр, төркмәндәр, тажиктар һәм әзербайжандар хәрби часть командованиеһына бойкот иғлан итте. Был акцияны башҡарыусылар икмәккә май яғып ашау менән генә сикләнеп, ҡалаҡтары менән һауыт-һабаларға һуғып, үҙ ризаһыҙлығын белдерҙе. Әммә тамаҡ тамуҡҡа төшөрә, тигәндәй, бойкот иғлан итеүселәрҙең "вегетариан" миҙгеле оҙаҡҡа һуҙылмай торғайны. Эйе, коммунистик режим мосолманға сусҡа ите ашарға ла өйрәтте шул. Шулай итеп, үҙем дә яңы хеҙмәткә алынған "дух" (ярты йылға тиклем беҙҙе шулай атанылар) булараҡ, башҡалар менән бер рәттән эҫе ашты йыпырып ултырғанда, ҡаршымда ултырыусы әзербайжан милләтле сержант Вейсалов ҡапыл аяғына баҫып, ынтылып, минең биткә тондормаһынмы, малай! Ҡулымдағы ҡалаҡ ырғып китте, ауыҙ-морондо һурпаға бешерҙем...

Мине үҙенсә аҡылға ултыртырға, ҡурҡытырға теләүсе сержант был ҡылығы менән булмышымдағы арыҫланды ғына уятты. Һөҙөмтәуның өсөн кереһенсә килеп сыҡты. Быйндай саҡта башҡорт балаһына уйланып-икеләнеп тороу юҡ инде ул, ҡалған хәрәкәттәрем үҙемдең ихтыярҙан тыш автоматик рәүештә, ҡаным ҡушыуы буйынса башҡарылды: бер сеүәтә эҫе ашты тегенең битенә ҡапланым да, шул ыңғайы яғаһынан эләктереп, ситкә һөйрәп сығарып, ашхананың таш стенаһына һул ҡулым менән иҙеүҙәренән бороп терәп, уң ҡулымдың йоҙроғо менән тегенең әпәй шүрлеген төйгөсләргә тотондом. Өҫтөмә тауҙай ябырылып, мине сержанттан көскә айырып алдылар. Старшина ротаны тышҡа сығып теҙелергә бойорҙо. Һуңынан уның әйтеүе буйынса, "минең ғәйеп буйынса рота ас ҡалды..."

Эштәр олоға китерлек йүнәлеш алһа ла, "ғәҙәттән тыш" тип нарыҡланырға тейешле был ваҡиға хәрби частың штабына барып етмәне. Алай ҙа. Старшинабыҙ прапорщик Назаренко: "Мин һеҙҙең арағыҙға ҡыҫылмайым, рота командиры, штаб офицерҙары был хаҡта бер нәмә лә белмәйәсәк, үҙ-ара мөнәсәбәтте үҙегеҙ көйләгеҙ..." - тиеү менән генә сикләнде. Уның һырты менән боролоуы минең файҙаға түгел, сөнки роталағы был ЧП-ны офицерҙар ҡатнашлығында рәсми тикшереү булмағас, миңә Вейсалов менән күҙмә-күҙ аңлашырға тура киләсәк, барыбер. Етмәһә, әзербайжандар беҙҙең хәрби часта эт тубығынан.

Кискә ҡарай яныма йөҙө арыу ғына таушалған Вейсалов килеп китте. Тағы ла һуғырға ынтылырмы, тип, әҙерләнеп торҙом, әммә ул миңә һуғыуҙың ни менән тамамланырын аңлап өлгөргәйне. Шулай ҙа:

- Мин барыбер хаҡлы, мосолман башың менән, сусҡа ите ашаған өсөн һуҡтым мин һиңә, - тиеп әйтеп һалмаһынмы.

- Һин барыбер беренсе булып һуҡтың, - тинем мин дә уға үҙ дәғүәмде белдереп, һис тә бирешергә теләмәйенсә.

- Ярар, төндә ҡарап ҡарарбыҙ, һин ниндәйһең икән, башҡорт, - тип китеп барҙы сержант "башҡорт" һүҙенә айырым баһа яһап.

Күңел тыныслығым тулыһынса юғалды. Хәҙер генә ул ваҡиға хаҡында тыныс фекер йөрөтә алам. Бер минут эсендә башыма меңәр төрлө уй инеп сыҡты. "Әллә Вейсаловҡа ошо рәүешле яуап биреп, хата эшләнемме?" тигән уй ҙа башҡа килде хатта. Уйымда ғына туғандарым, атай-әсәйем менән хушлашып бөттөм. "Мин бер үҙем. Нимә генә булмаһын, үҙемде үлтергәнсе туҡмап ташлаһалар ҙа, бер-икәүһенең мейеһен сәсрәтеп өлгөрәм, ғүмеремде арзан хаҡҡа ғына бирмәйем", тигән һығымта яһаным да, алда көтөлгән алышҡа әҙерләнә башланым. Отбойҙан һуң тимер карауаттың яңағын һурып алып, анһат ҡына алынмалы итеп кире ҡуйҙым да, салбарҙы кейгән килеш күлдәксән юрған аҫтына сумдым.

Мин үҙемде бер кемдән дә, бер нәмәнән дә ҡурҡмаған батыр кешемен тип тә әйтергә йыйынмайым, тик ахмаҡтарҙа ғына ҡурҡыу тойғоһо булмай, тиҙәр. Шулай ҙа алда көтөләсәк аңлашыуға бәйле билдәһеҙлек йәнемде үртәй, мин хатта ана шул аңлашыуҙы аша атлап булһа ла, үлергә әҙермен. Ул мәлдең тиҙерәк-тиҙерәк килеп етеүен көтөп, тештәремде шығырҙатам, йүгереп барып үҙемде алъюҫыҡҡа рәнйетеүсене өҙгөләп ташларҙаймын. Йәшәү, тормош хаҡында бер ни ҙә уйларлыҡ хәлдә түгелмен, булмышымда бары тик бер генә төрлө аңлау: хурлыҡтан үлем артыҡ, үлемдән оят көслө. Баҡтиһәң, бындай аңлау, бындай тойғо минең ҡанға яҙылған икән дә. Әммә ул саҡта миңә ҡайҙан был әйтемдәр хаҡында уйланып ятырға? Уйлаһам, бары тик алда көтөлгән алыш хаҡында ғына уйлағанмындыр.

Ул саҡтағы көтөү минең өсөн тотош мәңгелек булып тойолғандыр. Бер мәл яныма дневальный килеп, каптеркаға саҡырыуҙары хаҡында ҡолаҡҡа төшөрөп китте. Еңел һулыш алдым, сөнки билдәһеҙлеккә бәйле борсолоуҙарым оҙаҡҡа һуҙылмаясаҡ. Үҙемсә шулай күҙаллайым: каптеркала миңә Вейсалов менән бергә-бер һуғышырға тура киләсәк. Әгәр ҙә башҡалар уны яҡлап, миңә ташланһа, үлгәнсә һуғышасаҡмын. Ошо уйҙар менән каптеркаға барып индем...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы киләһе һанда).**

(Аҙағы киләһе һанда).

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡорт дәүләт аграр университетында Рәсәй һәм Германия йәш ғалимдарының II халыҡ-ара конференцияһы булып үтте. Тикшеренеүселәр һәм ғалимдар Рәсәй менән Германияның фәнни хеҙмәттәшлеге өлкәһендәге иң яҡшы ғилми һәм методик ҡаҙаныштарҙы тикшерҙе, был өлкәләге һөҙөмтәләр, проблемалар һәм мөмкинлектәр буйынса, шулай уҡ ике илдең берлектәге проекттары тураһында фекер алышты.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһына был көндәрҙә Халыҡ-ара Бөтә донъя уйындары ассоциацияһы һәм Милли һәм олимпия уйындарына индерелмәгән спорт төрҙәре буйынса комитеттың рәсми делегацияһы килде. Ҡунаҡтарҙы Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡабул итте. Осрашыуҙа 2021 йылғы Донъя уйындарын ойоштороу һәм үткәреү мәсьәләләре тикшерелде.

✓Башҡортостанда рус теле буйынса Берҙәм дәүләт имтиханын 26041 кеше тапшырҙы. Минималь сикте, ә ул быйыл 36 балға тиң ине, сығарылыш уҡыусыларының 2,6 проценты, йәғни 676 кеше үтә алманы, тип хәбәр иттеләр БР Мәғариф министрлығынан. Имтихан йомғаҡтары буйынса уртаса балл 60,42-гә тиң булды, 2011-ҙә ул 60,00 ине. Рус теле буйынса имтихандан икеле алған уҡыусылар математиканы уңышлыраҡ тапшырһа, уларға резерв көнөндә - 20 июндә ҡайтанан тапшырыу хоҡуғы биреләсәк. Математика буйынса БДИ һөҙөмтәләре киләһе аҙнала билдәле буласаҡ.

✓Башҡортостанда биология, тарих һәм информатика буйынса Берҙәм дәүләт имтихандарының һөҙөмтәләре билдәле булды. Өс имтихан һөҙөмтәләре буйынса 10 кеше 100 балл йыйған, шуларҙың туғыҙы - информатика һәм мәғлүмәт-коммуникация технологиялары буйынса, береһе - биологиянан. 728 уҡыусы минималь балл күләмен йыя алмаған: 322-һе - биологиянан, 250 кеше - тарихтан һәм 156 кеше - информатиканан, тип хәбәр иттеләр БР Мәғариф министрлығында.

✓Кисә сығарылыш уҡыусылары математиканан икенсе мотлаҡ имтихан тапшырҙы. Уның барышында өс ҡағыҙҙә боҙоу осрағы теркәлгән. Был хәлдәр Федоровка, Кушнаренко, Бүздәк райондарында күҙәтелгән. Уҡыусылар имтихан материалдарын интернетҡа һалған. Республикала үткән бөтөн имтихандар барышында йәмғеһе 11 ҡағыҙҙә боҙоу осрағы теркәлгән.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Өфөнөң йөрәге барыбер ошонда, сөнки ул тарихи яҡтан да, рухи йәһәттән дә уның иң үҙәге. Бында үҙенә күрә генә йылылығы, аураһы бар уның, ул һәр саҡ үҙенә тартып тора.*



ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЙӘЙӘҮЛЕГӘ ЛӘ...

## урам кәрәк

**Баш ҡалабыҙ үҙәктәренең береһе булған һәм үҙ ғүмерендә күпте күргән бөгөнгө Ленин урамы бындайын да һиллекте һәм хозурлыҡты күргәне булмағандыр шулай ҙа. Күп йылдар буйы ул трамвай тәгәрмәстәре шаҡылдауынан йүнкегән булһа, рельстарҙы һүтеп алып ташлағас та урам тынысланды, тип әйтеп булмай ине.**

Һуңғы йылдарҙа еңел машиналар һәм автобустар ташҡыны баҫып алды урамды. Был аңлашыла ла: күп кенә мөһим ойошма һәм учреждениелар, өҫтәүенә, Башҡорт дәүләт университеты, медицина, авиация-техник, педагогия университеттары, Өфө сәнғәт академияһы, бер-нисә колледж һәм техникум ошо урам тирәһенә тупланғанлыҡтан, пассажирҙар транспорты ағымы ҙур көсөргәнеш тыуҙыра. Етмәһә, тар һәм бәләкәй туҡталыштарҙа эреле-ваҡлы автобустар, "Газель" таксиҙары өсөн килеп туҡтау һәм ҡуҙғалып китеү ҙә бик ҡатмарлашты. Өҫтәүенә, юлаусылар ығы-зығыһына водителдәрҙең бер-береһен уҙҙырырға тырышып әрепләшеүҙәре лә ҡушылһа, эргәндә торған кеше тауышы ла ишетелмәй. Ә бөгөн ошо урам тыптын, буп-буш, йәнгә рәхәт, иркен, тыныс. 12 июнь иртәнге сәғәт унда урамда ап-аҡ формалы полиция хеҙмәткәрҙәре менән павильондар артына теҙелгән һатыусыларҙан башҡа бер кем дә юҡ ине. "Ҡунаҡһарай" рәттәрен үтеп,"Родина" кинотеатрына яҡынлағанда, "Нефтсе" мәҙәниәт һарайы алдындағы фонтандан урғылған һыуҙың гөрләүе ишетелә ине хатта. Баш ҡаланың олоғайған көнөндә икенсе йәшлеген кисергән, һәр кемгә яҡын, һәр йорто, һәр мөйөшө таныш һәм күңелгә эҫе тойолған Ленин урамы З.Вәлиди урамынан Киров урамына тиклем "Өфө Арбаты"на әүерелде был юлы: Рәсәй көнө, Салауат Юлаев көндәре, баш ҡала көнө һәм Рәсәйҙең 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүенең 200 йыллығына арналған байрамдарҙың төп сараларының береһе ошонда тантана итә.

Йәшлеген кисерә, тигәндән, ысынлап та, матурлана, төҙөкләнә урам, транспорт юлдары иркенәйтелгән - тип-тигеҙ асфальт ялтырап ята, тротуарҙарға плиткәләр түшәлгән, тирә-яҡ таҙа, йәшеллек. Роликлы коньkиҙар кейгән ҡыҙҙар һәм малайҙар эргәнән хас та ҡарлуғастар төҫлө кәйелеп-кәйелеп елдереп уҙалар, велосипедтарҙа уҙышыусылар ҙа бар. Сәғәт 11-ҙе һуғыуға, урам балаларын етәкләгән йә коляскала йөрөткән ата-әсәләр, йәштәр һәм өлкәндәр менән тулды. Бында уларҙы ике яҡлап та юл буйына теҙелгән сауҙа рәттәре һәм йәйге кафе, ресторан тирмәләре ҡаршылай. 11-12 июнь өфөләләрҙе бында бөтәһе 50-нән ашыу сауҙа һәм йәмәғәт туҡланыу предприятиелары хеҙмәтләндерә: бал, ағастан эшләнгән сувенирҙар, уйынсыҡтар, милли ризыҡ һәм аш-һыу тәҡдим итәләр. Күптәр "Ағиҙел" художество берекмәһе тауарҙары янында туҡтала. Байрамда өфөләләрҙе ҡабарып бешкән икмәктәре, шешлектәре менән һыйларға Ауырғазы районы ла килеп еткән. Сауҙа-йәрминкә рәттәрендә Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы, 64-се һөнәрселек училищеһы, 2-се Өфө педколледжы, Өфө урман хужалығы техникумының уҡыу-тәжрибә хужалығы үҙҙәре эшләгән һәм етештергән сувенирҙар,ҡул эштәре һәм үҫтергән продукцияларын алып сыҡҡан. Сауҙа рәттәре менән аралаштырып, һәр төрлө спорт ҡоролмалары, шахмат өҫтәлдәре теҙелгән. Спорт батутында тәүҙә шуның буйынса шөғөлләнгән балалар үҙ оҫталыҡтарын күрһәтһә, аҙаҡ унда теләге булған тамашасылар ҙа һикереп кинәнде. Турникта күтәрелеү, сәпкә уҡ атыу, шахмат уйындарын үҙ итеүселәр ҙә күп булды.

Шул арала бер нисә урында концерт программаһы башланып китте. "Нефтсе"мәҙәниәт һарайы алдында "Мираҫ" фольклор коллективы, "Ренессанс" халыҡ бейеү театры, "Мираж" бал бейеүҙәре ансамбле сығыштарын ҡарарға бик күп тамашасы йыйылып китте. Арыраҡ бер майҙансыҡта өйөлөшкән йәштәр гөр килеп кемделер алҡышлаған ергә ашыҡтыҡ беҙ ҙә. Баҡтиһәң, бында 15-16 йәштәрҙәге биш үҫмер тектоник тип аталған күҙ эйәрмәҫ заман бейеү хәрәкәттәрен башҡара. Һай, афарин, урамда тәртип боҙоп йөрөгәнсе,ташып торған көс һәм дәртте ана ниндәй файҙаға йүнәлтергә була!

Ҡыҫҡаһы, уйланылған сара маҡсатына иреште, тип әйтергә булалыр. Һәр хәлдә, ул көн Ленин урамында булған бик күптәрҙең фекере ине был. БР Президенты Рөстәм Хәмитов та ҡатыны Гөлшат ханым һәм баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов менән бергә йәйәүләп "Өфө Арбаты"нан үттеләр, концерт программаһы ҡаранылар, йыйылған халыҡ менән ниндәй урамды йәйәүлеләр өсөн асыу тураһында фекер алыштылар. Был урам ысын мәғәнәһендә үҙенсәлекле бер ижади һәм тарихи-мәҙәни үҙәккә әүерелергә тейеш, тигән фекер белдерелде.

Әйткәндәй, был хаҡта Өфө ҡала хакимиәте сайтында интернет-һорау ойошторолғайны инде. Күпселек М.Кәрим урамы өсөн тауыш бирһә лә, Ленин урамын үҙ итеүселәр ҙә байтаҡ. "Ленин урамын йәйәүлеләр зонаһына әйләндерһәләр, ниндәй шәп булыр ине, - ти студент Руслан Ғәйнуллин, - ул саҡта беҙ көн дә ошондай байрамдың тамашасыһы ғына түгел, ә ҡатнашыусыһы ла булып китер инек". Йәштәр фекере һәр саҡ оптимистик рухта, ә башҡалар был хаҡта ни уйлай икән?

**Рәйсә:** Мин Ленин урамына йәнәшәлә генә - К.Маркс урамында хәҙер инде бик оҙаҡ йылдар йәшәйем, бик яратам баш ҡалабыҙҙың ошо төбәген. Өфөнөң йөрәге барыбер ошонда тип уйлайым мин, сөнки ул тарихи яҡтан да, рухи йәһәттән дә уның иң үҙәге. Бында театрҙар, музейҙар, уҡыу йорттары, баш китапхана - ғөмүмән, үҙенә күрә генә йылылығы, аураһы бар уның, ул һәр саҡ үҙенә тартып тора. Ошо урамдарҙан үткән саҡтарҙа мин танылған яҙыусыларыбыҙҙы, артистарыбыҙҙы йыш осрата торғайным. Улар ҙа бит ошо тирәне төйәк итә ине. Әйткәндәй, улар Ленин урамынан йәйәү йөрөргә ярата ине. Үкенескә ҡаршы, улар инде юҡ, ә мин һаман да улар эҙҙәренең йылыһын, ҡотон һаҡлаған ошо урам буйлап йыш йөрөргә яратам...

**Илдар:** Ниһәйәт, Өфөлә йәйәүлеләр урамы асыу өлгөрөп еткән мәсьәләгә әүерелде. Ҡала округы хакимиәте Өфө Арбаты тураһында ныҡлап уйлай башлаған, ахырыһы. Интернетта ошо хаҡта һорау алыуҙар ҙа бара. Йәйәүлеләр урамы мотлаҡ ҡала халҡының яратҡан ял итеү урынына әйләнәсәк. Бөгөнгө кеүек үк булмаһа ла, үҙешмәкәр артистарҙы, сәнғәт оҫталарын йәлеп иткәндә, улар был урамды йәнләндереп ебәрер ине. Бер урында рәсем төшөрһөндәр, икенсе урында йырлап-бейеһендәр, кемдәрҙер үҙҙәре эшләгән ҡул эштәрен һатһын, балалар һәм ололар өсөн бәләкәй аттракциондар эшләһен - матур күренеш бит!

**Ирек:** Йәйәүлеләр урамы идеяһы оҡшай, әлбиттә. Әммә ундай урамдың ҡайҙа булырға тейеш икәнлеген күҙ алдына килтерә алмайым. Шәхси машиналы кеше булараҡ, Өфөнөң үҙәгендә бер урамды йәйәүлеләргә бирһәләр, күрше урамдарҙа тығын тағы ла көсәйәсәк. Өҫтәмә транспорт ағымы Өфөнөң үҙәк урамдары өсөн ҙур проблема бит. Машиналар әҙ йөрөгән урамдарҙы йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләһәң, улар автомобилләрҙе ылыҡтырмаған кеүек, йәйәүлеләрҙе лә ылыҡтырмаҫ. Бәлки, халыҡ күңеленә лә хуш килгән, транспортҡа ла ҡамасауламаған вариант тәҡдим итерләр?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө халҡы тарафынан был яңы сара йылы ҡабул ителде. Өфөлә йәйәүлеләр өсөн генә тәғәйенләнгән урам кәрәклеге хаҡында һүҙҙәр күптән йөрөһә лә, уның ошоғаса тормошҡа ашырылғаны юҡ. Ҡала округының яңы етәксеһе был эште тиҙләтеү яғында, шуға ла байрам көндәрендә Ленин урамының йәйәүлеләр ҡарамағына бирелеүе тәжрибә булараҡ та ҡабул ителде.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**



## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығына яңы етәксе тәғәйенләнде. Идаралыҡ начальнигы вазифаһын хәҙер Елена Робертовна Хаффазова башҡара. Һуңғы бер нисә йылда ул баш ҡаланың 93-сө гимназияһы директоры булып эшләне. Елена Хаффазова Карелия дәүләт педагогия институтын тамамлаған. Хеҙмәт эшмәкәрлеген Кондопога ҡалаһында башланғыс класс уҡытыусыһы булып башлай.

✓Өфөлә балалар баҡсаһы тағы берәүгә артты. Калинин районының Черниковка урамында 219-сы яңы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы асылды. Ул 220 балаға иҫәпләнгән. Һуңғы алты йылда Калинин районында биш балалар баҡсаһы сафҡа индерелгән, алдағы өс йылда иһә тағы бишәүҙе төҙөү планлаштырыла.

✓Башҡортостанстат мәғлүмәттәренә ярашлы, тауар һәм хеҙмәттәргә ҡулланыу хаҡтары индексы ағымдағы йылдың май айында 2011 йылдың декабренә ҡарата 101,7 процентты тәшкил итте, шул иҫәптән аҙыҡ-түлек тауарҙарына - 102,1 процент, аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған тауарҙарға - 101,7 процент , хеҙмәттәргә 101,2 процентҡа тиң булды.

✓13 июндән "Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте "Барыу һәм кире ҡайтыу өсөн билетҡа заказ биреп, кире килеүгә 50 процентлы ташлама ал" акцияһы үткәрә. Эш көндәрендә ҡала яны тимер юл транспортында йөрөү өсөн кирегә 50 проценты ташлама менән билет алырға мөмкин. Тик бының өсөн билет кассаһында ике яҡҡа ла билет алырға кәрәк буласаҡ.

✓Баймаҡ районы Әмин ауылында 23 июндә "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы үтәсәк һәм унда 1855 йылғы Батырша ихтилалын башлап ебәреүселәрҙең береһе, Брагин исемле яуыз баҫҡынсыны уҡтан атып үлтереүсе Әмин батырға мәрмәр таҡтаташ-стела асыласаҡ. Әмин ауылы дин әһелдәре, ололар һорауы буйынса совет заманында манараһын емереп, мәҙәниәт йортона әйләндерелгән мәсет йүнәтелеп, яңынан үҙ ишектәрен асасаҡ.

✓Рәсәй Гидрометеоүҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, алдағы көндәрҙә көндөҙгө һәм төнгө һауа температураһы тағы ла күтәреләсәк. Көндөҙ - 30 градус, төнөн 16-18 градус йылы булыуы көтөлә. Ял көндәрендә лә эҫе һауа торошо һаҡланасаҡ.

ӨФӨ ҠУНАҠТАРЫ

**Яҙҙың һуңғы көндәрендә Төркиәнең Стамбул ҡалаһы Фәтих районында Башҡортостан көндәре булып уҙҙы. Матур йолаға әйләнгән был байрам төрөктәр араһында киң популярлыҡ яулаған һәм көтөп алынған сараларҙың береһенә әүерелгән. Рәсми делегация һәм сәнғәт оҫталары ҡатнашлығында үткән байрамдар мәҙәни-ара аралашыуға ғына түгел, шулай уҡ эшлекле килешеүҙәр төҙөүгә лә булышлыҡ иткән.**



# БАЙРАМ САРАЛАРЫ...

## рухыбыҙ менән таныштырҙы

Үткән аҙнала Стамбул делегацияһы яуап визиты менән Өфөгә килде. Баш ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов менән эшлекле осрашыу барышында ҡала инфраструктураһын һәм транспорт селтәрен үҫтереү һәм камиллаштырыу йәһәтенән тәжрибә уртаҡлашыу хаҡында килешелде. Шулай уҡ Өфө һәм Стамбул араһында мәҙәни хеҙмәттәшлекте әүҙемләштереү тураһында ла һүҙ алып барылды. Ирек Ялалов белдереүенсә, эшлекле хеҙмәттәшлекте нығытыу төрөктәрҙә нығырлаҡ ҡыҙыҡһыныу уята, сөнки эшҡыуарлыҡ һәм бизнес алып барыу өсөн Өфө перспективалы ҡала. Төрөк проекттары беҙҙә, нигеҙҙә, күпер, юл үткәргес, кафе һәм ресторандар төҙөүгә ҡайтып ҡала. Шулай уҡ Стамбул вәкилдәрен Башҡортостанда туристик бизнесты һәм уҡыу учреждениелары араһында хеҙмәттәшлекте яйға һалыу мөмкинлеге лә ҡыҙыҡһындыра. Төркиәләгә осрашыу ваҡытында ошондай килешеүҙәрҙең береһенә ҡул ҡуйылған да инде. Уға ярашлы, бихисап төрөк эшҡыуарҙары һәм дәүләт эшмәкәрҙәре уҡып сыҡҡан ЧАПА Анатолий педагогик гимназияһы менән Өфөнөң Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡытыусылары һәм уҡыусылары берәрһендә эш һәм уҡыу тәжрибәһе менән уртаҡлашасаҡ.

Аралашыуға башланғыс һалынды ла инде. Башҡорт гимназияһы вәкилдәре төрөк уҡыу учреждениеһын үҙҙәре күреп ҡайтып, был юлы үҙҙәрендә Стамбул делегацияһын ҡабул итте. Ҡунаҡтар Мостай Кәрим исемендәге кабинет-музейҙа булып, бөйөк шәхестең тормош юлы һәм ижады менән танышты. Шулай уҡ Мәрйәм Бураҡаева исемендәге кабинет-музейҙа башҡорт халҡының көнкүрешен, тарихын, йолаларын сағылдырған экспозицияны ла оло ҡыҙыҡһыныу менән ҡараны, башҡорт аш-һыуын тәмләне.

Ғөмүмән, төрөктәрҙең ете көнгә иҫәпләнгән визит программаһы төрлө сараларға бай булды. Ҡунаҡтар Рәсәй, Ҡала һәм Салауат көндәре айҡанлы уҙғарылған байрам сараларында ла ҡатнашты. Өфө ҡалаһы һәм байрамдар хаҡында тәьҫораттары менән уртаҡлашып, Стамбул делегацияһы башлығы Аднан Гюлер былай тине: "Беҙ туғандаш халыҡтарҙа ҡунаҡта булыуыбыҙға шатбыҙ. Төрөктәр исеменән республика халҡына оло ихтирамымды һәм хөрмәтемде белдерәм. Мин бик күп илдәр һәм ҡалаларҙа булдым һәм ысын күңелдән Өфөнө донъялағы иң яҡшы ҡалаларҙың береһе, тип әйтә алам. Сал Урал итәгендә ултырған ҡалалағы йәшеллеккә һоҡланыуымды йәшерә алмайым. Киң урамдар, таҙалыҡ, матурлыҡ - иҫ китерлек, һоҡланғыс. Быларҙың барыһы ла Өфө халҡының һәм урындағы хакимиәттең үҙ ҡалаһына битараф булмауы, уны яратыуы һәм көндән-көн яҡшыраҡ итеү өҫтөндә эшләүе хаҡында һөйләй. Беҙгә этнографик музейҙа булырға һәм ҡаланың, республиканың хронологик үҫешен күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек биргән күргәҙмәне күреү бәхете тейҙе. Башҡорт халҡының үҙ тарихына, йолаларына, мәҙәниәтенә булған иғтибары һәм ихтирамы оло маҡтауға лайыҡ. Шулай уҡ Өфө халҡының һәм ҡала ҡунаҡтарының матур итеп байрам итә белеүен дә билдәләп үтеү мөһим, сөнки тырышып эшләгән кеше һәйбәт итеп ял да итергә тейеш. Өфөләр өсөн был сифаттарҙың барыһы ла хас".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Элек-электән төрлө ҡалалар араһында эшлекле һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек итеү йолаһы бар. Быңдай хеҙмәттәшлек ике яҡҡа ла тик ыңғай һөҙөмтәләр бирә, сөнки тәжрибә бүлешеү, теге йәки был өлкәлә эш алымдары менән уртаҡлашыу белгестәргә үҫергә һәм камиллашырға, ә ҡалаға яңы инвестициялар йәлеп итергә мөмкинселек бирә. Стамбулдың Фәтих һәм Өфөнөң Киров райондары араһында урынлашҡан тығыҙ бәйләнеш тә киләсәктә ошондай уңышлы емештәрен бирер, моғайын.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

ЙӨҘ ОЯЛА...

# СТӘРЛЕТАМАҠТА ЛА...

## хаталы яҙыуҙар етерлек

**Баш ҡалабыҙ Өфөлә төрлө атамаларҙағы, алтаҡталарҙағы хаталы яҙыуҙар менән баш ҡала округы хакимиәтендәге махсус комиссия көрәшә, төрлө рейдтар ойоштора икән. Гәзитегеҙҙән был хаҡта уҡыным да, үҙем йәшәгән Стәрлетамаҡ өсөн йәнем әрнеп ҡуйҙы. Бында мин ундай көрәште тоймайым.**

Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҡыуыма өсөнсө йыл. Көн дә Рәсәй һаҡлыҡ банкыһы эргәһенән үтәм. Бинаның алтаҡтаһындағы хаталы яҙыуҙы күреп, күңелем әрней. Ҡаланың урамдары, туҡталыштары атамаларындағы хаталар ҙа күҙгә салына: "Тукай", "Тынызлык" урамдары, "Нефть базаһы", "Тынызлык" туҡталыштары. Дарыуханалар, күңел асыу үҙәктәре, аҙыҡ-түлек магазиндары, кейем фабрикаһының фирма магазины, Куйбышев тимер юлы, Архитектура һәм ҡала төҙөү бүлеге алтаҡталарында күп кенә хаталар бар. Ә ҡайһы бер учреждение, магазиндарҙың яҙыуҙары тик рус теленә генә, ә башҡортса тәржемәһе юҡ.

Республикабыҙҙа башҡорт һәм рус телдәрен дәүләт теле итеп законлаштырыуға ла байтаҡ ҡына ваҡыт үтте. Беҙҙең стәрлеләр закон буйынса йәшәмәй, күрәһең.

**Әлфинә СӘЙФЕТДИНОВА,**

**З.Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ педагогия академияһы студенты.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ҒАРИЗАНЫ - ЭЛЕКТРОН ХАТ АША

**Хәҙер пенсия тәғәйенләү өсөн документтар башҡарыуҙы бик тиҙ үткәрәләр икән, тип ишеткәйнем. Ниндәйҙер яңы тәртип булдырҙылармы?**

- Элек "Рәсәй Федерацияһында хеҙмәт пенсиялары тураһындағы" законға өҫтәмә рәүештә пенсия тәғәйенләүҙе һорап, Пенсия фондына килгән граждандарҙың мөрәжәғәттәрен тәртипкә һалыусы Пенсия юллап мөрәжәғәт итеү ҡағиҙәләре лә бар ине. Әле күптән түгел ҡабул ителгән яңы регламент - ошо ҡағиҙәләрҙең киңәйтелгән һәм тулыландырылған версияһы ул. Бөтәһенән элек, ул Пенсия фондына мөрәжәғәт иткән граждандар өсөн уңайлы шарттар булдырыуҙы ҡарай. Хәҙер сиратта көтөп ултырыу 50 минуттан артыҡ ваҡытты алырға тейеш түгел. Документтарҙы тикшереп сығыуға һәм ғаризаны теркәүгә лә шунса ваҡыт бирелә. Яңы регламент буйынса, пенсия тәғәйенләү өсөн ғаризаны электрон бәйләнеш аша ла биреү мөмкинлеге күҙҙә тотола.

## АЛТМЫШЫҢ ТУЛДЫМЫ? АРТАБАН ЭШЛӘ!

**Быйыл миңә 60 йәш тула, ләкин мин, Алла бирһә, артабан да эшләрмен тип торам. Тик шуны асыҡлап бирһәгеҙ ине: әгәр пенсияға ғариза яҙһам, ул миңә тулыһынса түләнәсәкме, әллә өлөшләтәме? Ә инде уны әлегә бөтөнләй алмаһам, был минең киләсәктә аласаҡ пенсия күләмендә сағылырмы?**

- 60 йәшегеҙ тулғас, һеҙ үҙегеҙҙең хоҡуҡтарығыҙға ярашлы, пенсиягыҙҙы тулы күләмендә алыу мөмкинлегенә эйә булаһығыҙ. Шул уҡ ваҡытта, әгәр һеҙ эшләүегеҙҙе дауам итһәгеҙ, ғәҙәттәге индексациялауҙан тыш, эш биреүсегеҙ Рәсәй Пенсия фондына күсерә килгән взностарҙы иҫәпкә алып, пенсиягыҙ күләменә йыл һайын төҙәтмәләр индерелә барасаҡ. Ә инде пенсия тәғәйенләүҙе кисектерә ҡалһағыҙ, был һеҙҙең пенсияла буласаҡ ваҡытығыҙҙы ҡыҫҡартыу сәбәпле, айлыҡ пенсиягыҙ күләменең артыуына килтерәсәк.

## ОҘАҠ ЙӘШӘ - КҮБЕРӘК ПЕНСИЯ АЛЫРҺЫҢ

**Бер айҙан миңә 80 йәш тула. Элек был сикте үткәндәргә 1000 һум өҫтәлә ине, хәҙер күпме икән? Уны миңә нисек юлларға?**

- Ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһы составына билдәләнгән нигеҙ күләм инә, бөгөн ул 3278 һум. Пенсионерға 80 йәш тулһа, ул ике тапҡырға арттырыла, йәғни 6556 һум була. Тимәк, 80 йәштән һуң был өҫтәмә ағымдағы йылда 3 меңдән ашыу тәшкил итә. 80 йәштәге 1-се төркөм инвалидтарға был ҡағылмай, сөнки улар былай ҙа инвалидлыҡ буйынса әлеге өҫтәмәне ала. 80 йәш тулғас, был мәсьәлә менән Пенсия фондына мөрәжәғәт итеү мотлаҡ түгел, сөнки өҫтәмә тәғәйенләү автоматик рәүештә башҡарыла.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Цистит



Ашар алдынан ярты сәғәт алда 1-әр балғалаҡ иҙелгән һуған, алма һәм балды бергә болғатырға һәм ашарға. Ҡатнашманы алдан яһап ҡуймайһың. Цистит булмаһын өсөн ҡояшта ултырған һыу менән тәһәрәтләнергә ярамай.

### Йөҙөм һөйәге

Йөҙөмдө (виноград) хәҙер миҙгелдең һәр мәлендә лә һатып алырға була. Уның һөйәге "ите"нә ҡарағанда ла файҙалы. Бигерәк тә 40 йәшкә еткән ҡатын-ҡыҙҙар өсөн ул шифалы: һөйәктәр венала тромбоз барлыҡҡа килеүенә, йөрәк-ҡан тамырҙары сиренә ҡаршы тора, уларҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә. Әйткәндәй, йөҙөм һөйәген күпме ашаһаң да була, шулай ҙа саманы онотмағыҙ.

### Табан ярылһа

**Йәй аяҡ тирләһә, табан тиреһе ярылһа:** ❖ ике пакет сәйҙе 1 литр һыуға һалып, аяҡтарҙы тығып ултырырға;

❖ яҡшылап иҙелгән һуғанды табанға, үксәгә бәйләп йоҡлайһың. Иртән сәк һуғанды йыуып төшөрәһең дә табан, үксәне пемза менән таҙартаһың, крем һөртәһең. Был дауаны 2-3 мәртәбә йәки ярылған урындар төҙәлгәнсе эшләргә;

❖ дарыуханала һатылған үт тә файҙалы, унан компресс яһайһың.

### Ҡыҙыл сөгөлдөр

Ҡырғыстан үткәрелгән сөгөлдөр һутына бал ҡушып, 2 сәғәт асыҡ һауытта тоторға һәм көн һайын эсергә. Был дауа гипертоник сирҙәрҙе дауалай. Сей һәм бешкән сөгөлдөрҙән әҙерләнгән ризыҡтар эс ҡатыуҙан, аҙ ҡанлылыҡтан, йөрәк-ҡан, бөйәр ауырыуҙарынан да ҡотҡара.

### Тештәр һыҙлаһа

Ҡышҡа ҡарағанда, йәй тештәр йыш һәм нығыраҡ һыҙлауcан. Ул саҡта: 1) имән ҡайырыһының һәм юл япрағының төнәтмәһе менән ауыҙҙы сайҡарға; 2) соҡорланған теш һыҙлаһа, уға ат ҡолағы үләнен өҙөп ҡуйырға; 3) ярты һуғанды нәҙек кенә итеп киҫкеләп, марляға төрөп, теш һыҙлаған ергә ҡаршы яҡтағы ҡолаҡ тишегенә тығырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Француздар әйтмешләй, дошманға һағыҙаҡтай ташланған башҡорт яугирҙары былдай юлға барып, бер Наполеонға ҡаршы ғына һуғышмаған, беҙҙең хәҙерге көн хаҡына үҙ хоҡуғы өсөн дә көрәшкән.*



ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!













**1806 йылдың декабрендә Аустерлиц янында оло еңеүгә өлгәшкәндән һуң Наполеон Бонапарт Париждың Шайо ҡалҡыулығында үҙе барлыҡҡа килтергән Беренсе империяның оло еңеүҙәре хөрмәтенә Триумфаль арка төҙөргә ҡуша. Төҙөлөш эштәре бик оҙаҡҡа һуҙыла, етмәһә, был эшкә тотонған архитектор Шальгрен вафат булып ҡала. Бар донъяны, шулай уҡ Рәсәйҙе үҙенә буйһондорғандан һуң еңеү маршы аҫтында арка аҫтынан үтергә хыялланған Наполеон Рәсәй ерендә оло һәләкәткә юлыға. Триумфаль арканы 1836 йылда Франция менән хакимлыҡ итеүсе Луи-Филипп төҙөп бөтөрә. Шулай ҙа Наполеон бер тапҡыр был арка аша үтә. Әммә еңеү маршы менән түгел, ә 1840 йылдың 15 декабрендә Изге Елена утрауынан килтерелгән табутында Парижға әйләнеп ҡайта. Был арка аша Парижға иң беренселәрҙән булып Рәсәй ғәскәрҙәре сафында башҡорт яугирҙары ла үтә...**

# ЯУЛАНЫҠ, ТИП, ПАРИЖДЫ...

## тынысланыу фарызмы?

### Теүәл ике быуат үткәс...

Йылына, көнөнә тиклем тура килгән ике тарихи ваҡиғаның араһында теп-теүәл ике быуат ята. Ваҡиғаларҙың тәүгеһе 1812 йылдың 12 июнь иртәһе һәм икенсеһе - 2012 йылдың 12 июнь иртәһе. Тәүге ваҡиғала 1801-1812 йылдар араһында бөтә көнбайыш Европаны яулап алған "бәләкәс" - Наполеон Бонапарт, һөжүм итерен алдан хәбәр итмәйенсә (Гитлер ҙа унын алымын ҡабатлай), Неман йылғаһын аша сығып, Рәсәй еренә рөхсәтһеҙ аяҡ баҫа. Ул саҡта Наполеондың ғәскәрендә 678 мең, ә Рәсәй армияһында 210 мең һалдат, йәғни императорҙың ғәскәре беҙҙекенән өс тапҡыр самаһы күп була.

Хәҙер инде теүәл ике быуат үткәндән һуң ошо уҡ көндәге Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Өфөнөң Ленин майҙанында барған ваҡиғаға күҙ йүгертәйек. Һе, теүәл ике быуат элек Наполеон Париждағы Триумфаль арканың төҙөлөп бөтөүен көтөргә түҙемлелеге етмәйенсә, Рәсәйгә яу башлаған икән дә. Әгәр ҙә хикмәт шул аркала ғына булһа, һуғыш бөтөнләй булмаҫ инеме? Александр I ҙә Наполеондың Рәсәйгә ҡаршы һуғыш башлағанына ышанмай, үҙенең илсеһен император янына ебәреп ҡарай, тегеһе унын менән һөйләшергә лә теләмәй.

"Ҡабаланма, кеше көлдөрөрһөң", тиҙәр урыҫтар. "Ашыҡҡан ашҡа бешкән", ти башҡорттар. Наполеон үҙенең еңеү аркаһын төҙөп бөтмәһә лә, 2012 йылдың 12 июнендә Өфөнөң төп майҙанында Триумфаль арка балҡып ултыра ине. Рәсәй ғәскәренең 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүенең 200 йыллығына арналған театрлаштырылған тамаша ошо күркәм арка янында барҙы, тамашаны башҡарыусылар халыҡ алдына Триумфаль - еңеү аркаһы аша үтте. Ә тамаша барған майҙан Триумфаль майҙанға әйләнде. Дөрөҫөрәге, бынан теүәл ике быуат элек Мәскәүҙә, Парижда, Башҡортостанда барған тарихи ваҡиғалар Өфө ҡалаһының төп майҙанына күсте.

### Һүҙ менән аңлатҡыһыҙ...

Һүҙ менән генә аңлатып булмаҫтай күренештәр була, тиҙәр. Ҡалабыҙҙың рәсми-административ, ижади-мәҙәни көстәре (сценарий авторы - Зөһрә Бураҡаева, режиссеры - Валерий Анучин) тарафынан әҙерләнеп ошо майҙанда күрһәтелгән тамашаны ла тап шундай күренештәр исемлегенә индерергә булалыр, тим. Был тамашаны бары ҡарап ҡына бынан ике быуат элек үткән тарихи ваҡиғаларҙың шаһиты булырға, Рәсәй ҡораллы көстәре, атай-олатайҙарыбыҙҙың ҡаһарман үткәне менән ғорурланырға була. Беҙ, ул көндө майҙанға йыйылған тамашасылар, ысын мәғәнәһендәге Триумфаль тойғолар кисерҙек. Ә бит тамашаны ойоштороусылар бер сәғәт кенә ваҡыт эсенә күпме кисереш, күпме тарихи мәғлүмәт, күпме күңел балҡышы, күпме йөрәк тантанаһы, күпме ғорурлыҡ хисе һыйҙыра алған. Беҙгә ҡалһа, тамашала ҡатнашыусылар театрлаштырылған тамашаны башҡарманы, ә бынан ике быуат элек Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда барған ваҡиғаларҙа, ысынлап та, ҡатнашты һымаҡ. Улар ғына түгел, үҙебеҙ ҙә данлыҡлы атай-олатайҙарыбыҙға эйәреп, француз илбаҫарҙарын ҡыйрата-ҡыйрата, Триумфаль арка аша Парижды яуланыҡ. Тамашасы күңелендә бына ошо тойғоно тыуҙыра алыуы менән сара үҙенең маҡсатына артығы менән өлгәште. Һуңынан майҙанды тамаша ҡылыусы халыҡтың оҙаҡ ваҡыт таралмай тороуы ла ошо хаҡта һөйләй.

Тамаша буйына майҙан буйлап йүгереп йөрөүсе хат, гәзит, батшаның манифесын таратып йөрөүсе малайҙарҙың дәртен, ихласлығын ғына алып ҡарайыҡ! Ундай йәштә, ғөмүмән, былдай ваҡиғалар уйын итеп ҡабул ителмәй бит инде. Йә булмаһа, башҡорттарға "Любезные вы мои, башкиры!" тип өндәшеүсе Рәсәй армияһы сардары Кутузовтың каретаға ултырып килгән ерҙән нисек итеп халыҡ алдында төшөп ҡалыуына, нисек итеп халыҡтың уны алҡышлап ҡаршы алыуына ғына иғтибарҙы йүнәлтәйек! Тағы ла "Дунай" бейеүен башҡарыусы Стәрлетамаҡ бейеүселәренең оргиналь яу кейеменә, бейеүҙе башҡарған саҡтағы һын-һыпатына, аттарға атланып майҙан аша үткән башҡорт яугирҙарына һоҡланыуыбыҙ! Былар барыһы ла оло тамашаның айырым бер өлөштәре генә, тамашанан алған тотош тойғолар балҡышын, әйтеүемсә, һүҙ менән генә аңлатып булмаҫтыр. Ҡыҫҡаһы, беҙ бер сәғәт эсендә һәр һуғышта еңеүгә өлгәшеүсе Рәсәй армияһы, ундағы башҡорт яугирҙары өсөн ғорурландыҡ, халҡыбыҙҙың ошо еңеүҙәге ролен аңланыҡ, дуҫлыҡтың, берҙәмлектең ниндәй ҡөҙрәткә эйә булыуына инандыҡ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Был сара беҙгә күп кенә хәҡиҡәтте аңларға ла ярҙам итте. Наполеондың көнбайыш Европа илдәрен яулай барыуы һәм киләсәктә Рәсәйгә һуғыш менән килеү ҡурҡынысы барлыҡҡа килгәс, 1811 йылда Ырымбур губернаторы Г.С. Волконский башҡорттарға 500 яугирҙан торған ике полк төҙөргә ҡуша. Белеүебеҙсә, һуғыш башланғас, полктарҙың һаны 28-гә етә. Бынан тыш, 12 мең башҡорт яугиры Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиктәрен һаҡлай. Башҡорттар шул йылды йыл ҡоро килеүгә ҡарамаҫтан, Рәсәй армияһына 4139 ат бүләк итә, аҡса йыйып бирә. Полктарҙы туплау, һәр яугирҙы икешәр ат, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, яу-ярағы менән тәьмин итеү, ремонт полктары булдырыу - былар барыһы ла халыҡ иҫәбенә, йәғни үҙ полктарын төҙөгән ырыуҙар елкәһенә төшә. Ҡыҫҡаһы, ғәскәр төҙөү һәм уны барлыҡ кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү фәҡәт үҙ дәүләтселеге булған халыҡтың ғына ҡулынан килерлек ғәмәл.**

**Икенсенән, Александр Беренсенең Наполеонға ҡаршы изге яуға күтәрелеүгә саҡырған манифесын башҡорттар халыҡҡа мәсеттәрҙә уҡып еткерә. Ошонан һуң халҡыбыҙ төҙөлгән ике полк менән туҡталып ҡалмайынса, тағы ла күп һандағы ғәскәр туплау инициативаһы менән үҙе ҡалҡып сыға. Был һуғышта һан яғынан башҡорттар урыҫтарҙан ҡала икенсе урында була. Күптәр был яуҙа ҡатнашыу, ҡорбандар биреү нимәгә кәрәк булған беҙгә, тигәнерәк фекерҙе лә әйтә хәҙер. Ә бит ҡорбандар бушҡа бирелмәй, унын сауабын ҡайтарыу Аллаһы Тәғәләнең ғәмәле. Французлар әйтмешләй, дошманға һағыҙаҡтай ташланған башҡорт яугирҙары былдай юлға барып, бер Наполеонға ҡаршы ғына һуғышмаған, беҙҙең хәҙерге көн хаҡына үҙ хоҡуғы өсөн дә көрәшкән. Баш ҡалабыҙҙың төп майҙанында үткән театрлаштырылған тамаша беҙгә ошо хәҡиҡәтте аңларға ярҙам итә: яуланыҡ тип Парижды, тынысланыу фарызмы?**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...



# БОРОДИНО ҺУҒЫШЫ...

## Ҡырмыҫҡалы яланында

**Ҡырмыҫҡалы районы Тауһеңгер ауылы янында үткән район һабантуйы, "Любезники-любизар" тамашаһы һәм 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүгә 200 йыл тулыуға арналған хәрби-тарихи реконструкция күренештәре лә өҫтәлеп, республика, хатта Рәсәй кимәлендәге байрамға әүерелде. Байрамға килеүселәр, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов, башҡа ҡунаҡтар 1812 йылғы дәһшәтле ваҡиғаларҙы хәтерләткән алыш, яу сабыуҙар, ҡылыс сабыш, уҡ атыштарҙы үҙ күҙҙәре менән күрҙе, шартлауҙарҙы үҙ ҡолағы менән ишетте, әсе дары еҫен дә татыны.**

Билдәле ижадсы Зөһрә Бураҡаева сценарийы буйынса режиссер Рөстәм Хәкимов ҡуйған театрлаштырылған тамаша күренештәре башҡорт донъяһында ирәйеп йөшәп ятҡан егеттәр һәм ҡыҙҙарҙың, ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың һуғыш тураһында хәбәр алыуын, аҡ батшаның башҡорттарға фарманын, ир-егеттәрҙең ике лә уйламай яугир кейеменә кейенеп, атҡа атланыуын, уларҙың яуҙа күрһәткән батырлыҡтарын, немецтың классик шағиры Иоганн Гете менән осрашыуҙарын һүрәтләй.

Артабан төп сәхнәнән ситтәге яланда тамашасылар өсөн ып-ысын һуғыш картиналары тергеҙелә башлай: бына француз армияһының 6-сы пехота полкы, улар артынса француз гусарҙары күренә. Шунда уҡ уларға ҡаршы рус армияһы пехотаһы күтәрелә. Пушканан туптар атыла, мылтыҡ шартлатыуҙар ишетелә. Алыштар башланып киткәс, көнсығыш тарафта арьергардта торған кавалерия һай-һайлап килеп сығып, дошманды ҡамап ала. Уларҙы тар-мар иткәс, төньяҡ амурҙары дошмандың еңел кавалерияһын да ҡасырға мәжбүр итә. Бөтөн был күренештәр хоккей матчтарының алыштырғыһыҙ комментаторы Азамат Моратов уҡыуында, аңлатыуында атҡарыла һәм яу күренештәренең тәьҫирен тағы ла нығыраҡ көсәйтә. Тап ошо мәлдә күп кенә тамашасыларҙың күңеле тулышып, күҙ йәштәрен һөртөп алыуына ла шаһит булынды. Ысын энтузиаст һәм илһөйәр Илдар Шәйәхмәтов етәкселегендәге "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи реконструкция клубы ағзалары шулай тулҡынланырға мәжбүр итте барыһын да. Хәйер, "Төньяҡ амурҙар"ға ла, "Өфө пехота полкы" клубына ла илһөйәр булмағандар йөрөй алмайҙыр. "Өфө пехота полкы" клубы ағзаһы табип Геннадий Шевелев, мәҫәлән, был сараларҙа ҡатнашыуҙың үҙе өсөн ниндәй әһәмиәткә эйә булыуын һөйләп: "Хәрби-тарихи реконструкцияларҙа ҡатнашыу хобби ғына түгел, ә йәшәү рәүеше", - тип билдәләне.

Сарала туранан-тура ҡатнашмаһа ла, башҡорт атлы полкының муллаһы кейемендә килгән 83-сө йәше менән барған Ғиндулла Шәйәхмәтов үҙенең улы - "Төньяҡ амурҙары" клубы етәксеһе Илдар Шәйәхмәтовтың эшмәкәрлеге тураһында: "Бөгөн кәс, дәрт ташып торған улымды бәләкәйҙән илһөйәр һәм телһөйәр итеп тәрбиәләргә ынтылдым һәм тәрбиә алымдарымдың дөрөҫ йүнәлештә булғанлығына һөйөнәм. Ул халҡыбыҙға хеҙмәт итә. Ир кеше өсөн ошонан да - илһөйәр ул үҫтереүҙән дә ҙурыраҡ бәхет бармы икән? Элегерәк мин уны дәртләндергән булһам, хәҙер ул мине үҙе артынан эйәртә", - тине. Аҡһаҡал фекеренсә, халҡыбыҙҙың яугирлыҡ традицияларын тергеҙеүсе ошондай сараларҙы даими үткәреүҙе дауам итергә кәрәк.

**Ошо фекерҙе Учалы районы Әүешкүл ауылынан килгән уҡытыусы Фәнүр Шаһиев та хупланы һәм түбәндәгеләрҙе һөйләне:**

- Минә байрамдың төп сараһы - 1812 йылғы Ватан һуғышының реконструкцияһында ҡатнашырға насип булды. Учалынан беҙ унда өс кеше ҡатнаштыҡ. Кейемен һәр кем үҙе тектереп алып килде. Учалы ауылынан Нәжип Ибраһимовтың костюмы тулыһынса тарихи осорҙо кәүҙәләндерә. Кейеме тик кейеҙҙән һәм ысын тиренән тегелгән. Уральск ҡасабаһынан Минзәлә Яхинаның башҡорт ҡатын-ҡыҙын һынландырыуы үҙенсәлекле булды. "Төньяҡ амурҙары" клубына яныраҡ ҡына индем. Шуға бындай сарала тәүге тапҡыр ҡатнашам. Яу кейемен, ҡоралдарын реконструкциялау хаҡында күптән хыялланып йөрөй инем. Ике йыл элек Сәфәр ауылынан тире эшкәртеүсе Сәғит Фәхретдинов хаҡында белеп ҡалдым. Барып ниәтемде әйткәс, ул 11 килограмлыҡ ат тиреһе табып алып килде. Шул тиренән костюм тектек, ҡалҡан яһаныҡ. Ҡайһы бер костюм өлөштәрен бергә эшләнек. Мин өйрәнсек сифатында уға ярҙамлашып, үҙем күп нескәлектәрҙе белеп ҡалдым. Костюм тегеү - бер, ә яу ваҡиғаларын реконструкциялау тағы ла ҡыйыныраҡ эш икәненә инандым. Шуға күрә был тамашала ҡатнашыусыларҙың барыһы ла ҙур хөрмәткә лайыҡ. Улар үҙ теләге, күңел талабы менән, аҡсаһын да, ваҡытын да йәлләмәй, бында килде һәм сығыш яһаны.

Учалы районы яугирҙары һуғышта өлөшләтә ете полк составында ҡатнашҡан. 18-се полк иһә тулыһынса учалыларҙан тупланған. Шулай уҡ 14-се полктың күпселек өлөшө беҙҙең райондаштарҙан торған. Бынан тыш, учалылар 1-се, 2-се типтәр һәм 2-се мишәр полкында ҡатнашҡан. Эҙләнеү барышында 80-гә яҡын кешенең исемен асыҡланым. 15-20 кешенең бөгөнгө тоҡомдарын таптыҡ. Шуныһы билдәле: 14-се полк составының 80 проценты яу яланында ятып ҡала, 99 кеше һәм 223 ат ҡына кире әйләнеп ҡайта...

**Һабантуйға 1812 йылдарҙағы тарихи ваҡиғаларҙы реконструкциялауҙа ҡатнашыу өсөн башҡа төбәктәрҙең хәрби-патриотик клубтары ла килгәйне. Мәскәү өлкәһенән килгән "Вохонский ратник" хәрби-патриотик клубы һуғышсыһы Лилия Швецова республикабыҙ хаҡындағы тәьҫораттары менән бүлеште:**

- Башҡортостанда булыуҙан тик яҡшы тәьҫораттар ҡалды. Байрамы ла, тамашаны ла яҡшы итеп әҙерләгәндәре күренеп тора. Башҡорттар үтә лә иғтибарлы һәм ҡунаҡсыл халыҡ икән, тип һоҡланабыҙ бына.

Беҙҙең хәрби-тарихи клуб Мәскәү өлкәһенең Павловский Посад районының Большие Дворы ҡасабаһында урынлашҡан. Биш мең кешелек ҡасабанан илле өс кеше ошо клубта шөғөлләнә. Йыл һайын сентябрҙең һуңғы шәмбе, йәкшәмбеһендә 1812 йылды реконструкциялаған "һуғыштар" үткәрәбеҙ. Бөгөн беҙҙең клуб бөтә Европаны урап сыҡты. Аустерлицта, Ватерлоола булды. Лейпциг, Париж, Италия, Лихтенштейн, 1812 йылдағы һуғыш ҡағылған башҡа күп ҡалаларға һәм илдәргә барҙы. Йыйылыштарыбыҙға балаларҙы һәм йәштәребеҙҙе лә саҡырабыҙ һәм уларға тарих хаҡында һөйләйбеҙ, тарихи китаптар уҡыйбыҙ. Йәштәр был әңгәмәләрҙе йотлоғоп тыңлай, күҙҙәре янып ҡайтып китә. Улар өйҙәрендә китап уҡып, тарихты өйрәнеп ултырмай бит инде. Шуға күрә хәрби-патриотик клубтарҙың йәш быуынды ысын илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләүҙәге роле ҙур тип уйлайым.













**(Дауамы 16-сы биттә).**

✓ *Шуға күрә мин эскелектән тамам ҡотолоробоҙға һәм ауылдарыбыҙҙа йәшәү шарты яҡшы яҡҡа үҙгәреренә ныҡлы ышаныстамын. Нимә генә тимәйек, иң ҙур бәләбеҙ - ул эскелек.*



# УРТЫМДА ҠАН, Ярайым, тип,

**Уҙған йылда гәзитебеҙҙә ойошторолған "СМСнамә - шиғри әйтеш" бәйгеһендә әүҙем ҡатнашып, унда күтәрелгән һәр бер проблемаға оло кинәйә аша асырғаныу менән үҙ мөнәсәбәтен белдереүсе һәм бәйгелә еңеп сығыусы ЭТҠОЛ сәсәнден Баймаҡ районының Икенсе Этҡол ауылында йәшәүсе ир-уҙаман Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ икәнлеген яҙып үткәйнек инде. Яңыраҡ беҙгә уның тыуған ауылында булып, үҙе менән оҙайлы бәхәс ҡороу бәхете тейҙе. "Үлән үҫкән ерендә генә үҫә", "Алма ағасынан алыҫ төшмәй" тигән кеүек, Әкрәм Ҡәйепҡолов, тарихсы һәм крайҙы өйрәнеүсе Азамат Тажетдинов үҙенең китаптарында яҙып үткәнсе, данлыҡлы Байыш ишан нәҫеленән. Уҡып алған һөнәре буйынса тракторсы, зиһен үткерлеге, фекер үҙенсәлеге буйынса сәсән телле ғалим. Әкрәм ағайҙың "Автобиография" тигән ҡыҫҡа ғына шиғырында холоҡ-фиғеле лә, йәшәү мәғәнәһе лә тулыһынса сағылыш таба:**

| | |
|---|---|
| **Йөрөһәм дә гел көләп,** | **Ярайым, тип, сөскөрмәйем,** |
| **Йәшәйем яныпкөйөп.** | **Ауыр булһын, белдермәйем,** |
| **Уртымда ҡан, төкөрмәйем,** | **Дошмандарҙан көлдөрмәйем.** |

**Күптәр тарафынан "сәйер кеше", "тиҫкәре" тип нарыҡланған Әкрәм ағай менән яҡындан арлашҡас, беҙ уның һис кемгә оҡшамаған шәхес икәнен күреп таң ҡалдыҡ. Ҡыҫҡаһы, һүҙҙе Әкрәм Ҡәйепҡоловтың үҙенә бирәбеҙ.**

## Тиҫкәре әҙәммен

Мин, ғөмүмән, шундай тиҫкәре әҙәммен, алдыма алғанды ҡуймайым. Ниндәйҙер һүҙҙе әйтһәм, мине уның киреһенә дүндереү бөтөнләй мөмкин булмаған эш. Холҡомдағы ҡәтғилегем атайым яғынан да, әсәйем яғынан да киләләр тип уйлайым. Минең башҡаларға һис тә оҡшамаған сифат-ҡылыҡтарым бар. Шуларҙың береһе: мин кешенән ғәфү үтенмәйем. Ғөмүмән, кешенең күңеленә яра һалғанһың икән, ғәфү үтенеүҙән ни файҙа? Әгәр ҙә кемгәлер һаҡһыҙ йә башҡа төрлө насарлыҡ эшләһәм, уға тиҙ генә яҡшылыҡ эшләп, хатамды төҙәтергә ашығам. Үҙемсә быны дөрөҫ юлдыр тип иҫәпләйем. Сөнки ғәфү итеүҙе һораған саҡта һинең был үтенесең үтәлә ҡалһа, кеше был хәләтен тиҙ онота һәм шул уҡ кешегә тәүгеһенән дә ауырыраҡ насарлыҡ ҡыла, яра һала, хата ҡабатлана, хаслыҡҡа әүерелә башлай. Ғәфү үтенеү яуаплылыҡты кәметә, ғәфү ителерен белгән ғәфү үтенеүсе шаша, аҙа башлай, үҙе һәм башҡалар алдында яуапһыҙ бер әҙәмгә әүерелә. Кешеләр ҙә минең был ҡылығыма өйрәнеп бөттө: улар минең өндәшмәүҙе ғәфү үтенеү һәм ғәфү ителеү тип аңлай.

Миңә кешеләр төрлө үтенестәр менән мөрәжәғәт итә. Мөмкинлегемә ҡарап, уларҙың үтенесен үтәргә тырышам. Күберәге баш төҙәтергә аҡса һорайҙар. Әгәр ҙә бер тапҡыр ундай кешенең хәленә инһәң, күп тә үтмәй, тағы ла килә. Был хәл бик күп тапҡырҙар ҡабатланһа, йәғни эскегә һалышыусы аҙа башлаһа, аҡсам юҡлығы хаҡында белдереп, ярҙам итеүемде кинәт туҡтатһам, теге кеше асыуланып: "Нисек инде һинең аҡсаң юҡ, һин бит пенсия алаһың?" - тигән дәғүә белдерә. Ундайҙар хатта йоҙроҡ болғап янауҙан да тартынмай. Ҡыҫҡаһы, ғәфү итеүҙең һәм ғәфү үтенеүҙең кире һөҙөмтәләре бына ошо миҫалға, йәғни баш төҙәтеүгә аҡса һораусының хәленә инеүгә тиң күренеш.

Үҙен әллә кемгә ҡуйып, эре ҡыланыусыларға әсе генә итеп һоғондороп та алам. Ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ буйынса эш итеүҙе лә яратмайым. Урын ерендә эшләүсе таныштарымдан, туғандарымдан бер ваҡытта ла ярҙам һорағаным булманы һәм һорамаясаҡмын да. Фәүәз ҡустымды ҙур ғына түрә итеп ҡуйғайнылар, бер ваҡытта ла уға ярҙам һорап барманым, эштән сыҡҡайны, иртәгәһенә үк барып еттем. Бер ваҡыт таҡта кәрәк булғас, бер ауылдашҡа мөрәжәғәт иткәйнем, ул: "Ал, ағай, һиңә ярты хаҡына бирәм", - тине. Мин уға, "Ниңә һин мине ярты кешегә һанайһыңмы?" - тип тейешле хаҡын түләп, таҡтаны алып ҡайттым.

Былар барыһы ла минең үҙһүҙлелектән киләләр, тип уйлайым. Икенсенән, йәнем көйөп асыуланған кешемә, киреһенсә, яҡшы мөнәсәбәттә булырға тырышам, уға асыуымды белдермәйем. Кем белә, бәлки, асыуланыуымды белдермәүем үҙемә күрә уны ғәфү итеүемдер ҙә.

Тағы ла кешене шаяртырға, мәрәкәләргә яратам. Шуға күрә күптәр мине алдаҡсыға һанай. Бер мәл урам буйлап китеп барһам, берәү осраны ла, ҡайҙа китеп барыуымды һораштыы. Мин уға Фәкиһә апайға китеп барыуымды әйткәйнем, ул: "Ә унда нимә эшләйһең?" - ти. Мин: "Фәкиһә апайҙың ата ҡаҙы һыуға батып үлгән", тигәйнем, теге туҙынды ла китте.

## Минән бай кеше юҡ

Яңғыҙлыҡ яратам. Бала сағымда ла иртәнсәк сығып китәм дә, төшкө ашҡа ла ҡайтмайынса, кискә тиклем урман-тауҙар ҡыҙыра торғайным. Беҙҙең яҡтың мин булмаған тау-урмандары, йылға-күл буйҙары ҡалмағандыр. Уралтау буйҙарын ҡыҙырғанда бигерәк тә ҡоштар моңо күңелемде әсир итә. Күрмәгән урынды күргем килә. Яңғыҙ йөрөгәнемдә бер сәйер теләгем дә бар: ул да булһа, ниндәйҙер ауыр хәлгә ҡалыуҙан, мажараға тарыуҙан күңелдә тыуған кинәнес. Күрәһең, ҡаным туҡтауһыҙ адреналин, күңелем романтика көҫәйҙер инде. 1968 йылда бер кемгә лә әйтмәйенсә, Шүлгән мәмерйәһенә сыҡтым да киттем. Ике дуҫ малайҙы ла эйәрттем. Ауылдан велосипед менән сыҡтыҡ. Аҙнанан ашыу йөрөп ҡайттыҡ. Үҙебеҙҙең төбәктең бар ауылдарын йөрөп сыҡтым. Баймаҡ районының Ҡыуат, Йылайыр районының Яҡуп, Ғәле, Хәйбулла районының Баш бүре, Аҡъюл ауылдарында ғына булманым. Ә булған ауылдарымдың һәр ҡайһыһында ҡунып китер, ауыр хәлдә ҡалғанда ярҙам итерлек дуҫым йә танышым бар. Араларында етәкселәр ҙә, банкирҙар ҙа етерлек. Ҡыҫҡаһы, донъяла минән дә бай кеше юҡ. Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, минең паспортым булманы. Әллә совет власын инҡар иткәнгә инде, уның төп документы миндә булманы. Бары тик пенсияға сыҡҡас, пенсия юлларға кәрәк булған өсөн генә паспорт юллап алдым.

## Профессиональ эскесе инем...

Һауаға уҡ атһаң, ул иң юғарыға күтәрелеп етеп, траекторияһын бер аҙ үҙгәртеп, кире ергә борола һәм төшә башлай. Шунын кеүек, һәр бер күренештең дә күтәрелеү һәм түбән төшөү мәле була. Әммә һәр осраҡта ла уҡ һуңынан ергә килеп ҡаҙала. Эскелек тә ҡасандыр үҙенең юғары нөктәһенә етеп, хәҙер түбән төшә бара һәм, уҡ ергә килеп төшкән һымаҡ, беҙҙең ауылдарҙа ла бөтөнләй эсмәй башлаясаҡтар. Шуға күрә мин эскелектән тамам ҡотолоробоҙға һәм ауылдарыбыҙҙа йәшәү шарты яҡшы яҡҡа үҙгәреренә ныҡлы ышаныстамын. Нимә генә тимәйек, иң ҙур бәләбеҙ - ул эскелек. Мин үҙем бына профессиональ алкоголик кеше, эсеүҙе бер ниндәй медицина ярҙамһыҙ ҡапыл ғына ташлай алдым. Ул саҡта мин Сибай ҡалаһының Арҡайым биҫтәһендә бер кешегә өй эшләй инем. Хужаның ҡатыны миңә 3 литрлыҡ банка менән яйлап эсергә тип таҙа спирт ҡалдырып китте. Ул эсергә яратҡан ире алдында мине, эсә белә, тип маҡтағайны, ошо һүҙе миңә эсеүемде ташларға ярҙам итте лә инде. Әгәр ҙә ул ҡатын мине иренә ҡушып әрләһә, бәлки, был аҙымға бара ла алмаған булыр инем. Шул саҡта үҙ-үҙемә "мин ҡабат эсмәйем" тиеп әйттем дә, шул һүҙемә тоғро ҡалдым. Тәмәкене лә шулай һүҙ биреп ташланым. Холҡомдағы ҡәтғилегем шулай яман ғәҙәттәрем менән хушлашырға ярҙам итте.

## Туғанлыҡ хисе

Беҙҙең Баймаҡ кешеләре башҡа яҡ кешеләренән туғанлыҡты һанлауы менән айырылып торалыр ул. Бер ғаилә эсендәгеләр үҙ-ара ыҙғышып киткән осраҡта ла, ситтән килеүселәр уларҙың береһенә ҡағылһа, үҙ-ара аңлашылмаусанлыҡтар шунда уҡ онотола. Яҡташтарымдың туғанлыҡты һанлауының бер сәбәбен мин арабыҙҙа үтә байҙарҙың булмауынан да күрәм. Сөнки юҡлыҡ талаштыра, байлыҡ ярастыра, тиһәләр ҙә, донъялағы барлыҡ һуғыш-ыҙғыштарҙың нигеҙендә байлыҡ бүлешә алмау сәбәпсе бит. Йылайыр районының Матрай ауылында бер егеттән туғандарының исемен һорағайным, ул аталары менән саҡырышып йәшәүсе урыҫ, татар, сыуаш кешеләрен дә ошо исемлектә атаны. Шунын кеүек, туғанлыҡ менән әшнәлек, белешлек, дуҫлыҡ тойғоһон бутаусылар ҙа бар хәҙер.

Беҙҙең милләт элек-электән туғанлыҡ хисе менән көслө булған. Ғаиләләрҙең, араларҙың, зат-ырыуҙарҙың көслө булыуы үҙ нәүбәтендә халҡыбыҙҙы ла ҡаҡшамаҫ рухлы иткән. Совет осоронон "Кеше кешегә иптәш һәм дуҫ" тигән идеологияһы, пионер, комсомол һәм партия ойошмалары туғанлыҡ хисебеҙҙе онотторор өсөн бик күпте эшләне һәм ниндәйҙер кимәлдә маҡсатына өлгәште лә. Элек ауылда кеше үҙенән өлкән кешенең һүҙен тыңлаған, уны һанлаған, шуға күрә хаталарҙы аҙ яһаған. Дөрөҫөн әйткәндә, коммунистик идеология халҡыбыҙҙың туғанлыҡ хисенә ҙур зыян яһап, уны эске яҡтан ҡаҡшатты. Мин кешенең кешегә иптәш, дуҫ булыуын кире ҡаҡмайым, әммә ҡан туғанлығын инҡар итергә тырышҡан идеологияны кеше күңеленә көсләп тағырға тырышыуын ҡабул итеп булмай.

## Ир-ат тәрбиәһе

Беҙҙә ысын мәғәнәһендәге ир-ат тәрбиәләү мәктәбе күптән онотолған. Беҙҙең белем биреү системаһы, мәктәп йыуаш, баҫалҡы кешене яҡшы кеше тип баһалағас, ысын ир-аттар тәрбиәләнмәй ҡала инде. Ир-ат характеры ҡапма-ҡаршылыҡлы мөхиттә формалаша, бала бәләкәй сағынан ҡыйыу булып үҫмәһә, һуңынан барыбер йыуаш булып ҡала. Ә беҙҙең мәктәптәрҙә шаярған, һуғышҡан малайҙарға "хулиган" ярлығы тағалар, тыялар, һәр хәлдә, был сифат кире сифат булып баһалана. Хәҙер инде шундай һорау ҡуйыйыҡ: ә ни өсөн малай кеше шаяра һәм һуғыша һуң? Әлбиттә, үҙендә ысын ир-ат сифаттары барлыҡҡа килтерер өсөн. Ул быны аңлы рәүештә башҡармай, аҫҡы аңы быны талап итә. Иң беренсе нәүбәттә, ир-ат малай сағынан уҡ үҙ-үҙен яҡлай белергә бурыслы. Үҙ-үҙен яҡлай алмаған кеше ғаиләһен дә, туғандарын да, дуҫтарын да, халҡын да яҡлай алмай. Беҙҙең мәктәптә, киреһенсә, йыуаш, мәшәү ир баланы "ҡыҙҙар кеүек аҡыллы" тип күккә күтәрергә әҙер генә торалар. Ә инде һуғыш суҡмарҙары мәктәпте артҡа һөйрәүселәр иҫәбендә йөрөй, уларҙың ата-әсәһен мәктәпкә саҡырталар, һәр төрлө ысул менән баҫым яһайҙар, ҡыҫҡаһы, ошо юл менән уларҙың ысын ир-ат булырға ынтылы-

*Беҙҙә ысын мәғәнәһендәге ир-ат тәрбиәләү мәктәбе күптән онотолған. Беҙҙең белем биреү системаһы, мәктәп йыуаш, баҫалҡы кешене яҡшы кеше тип баһалағас, ысын ир-аттар тәрбиәләнмәй ҡала инде. Ир-ат характеры ҡапма-ҡаршылыҡлы мөхиттә формалаша, бала бәләкәй сағынан ҡыйыу булып үҫмәһә, һуңынан барыбер йыуаш булып ҡала. Ә беҙҙең мәктәптәрҙә шаярған, һуғышҡан малайҙарға "хулиган" ярлығы тағалар, тыялар, һәр хәлдә, был сифат кире сифат булып баһалана. Хәҙер инде шундай һорау ҡуйыйыҡ: ә ни өсөн малай кеше шаяра һәм һуғыша һуң? Әлбиттә, үҙендә ысын ир-ат сифаттары барлыҡҡа килтерер өсөн. Ул быны аңлы рәүештә башҡармай, аҫҡы аңы быны талап итә. Иң беренсе нәүбәттә, ир-ат малай сағынан уҡ үҙ-үҙен яҡлай белергә бурыслы. Үҙ-үҙен яҡлай алмаған кеше ғаиләһен дә, туғандарын да, дуҫтарын да, халҡын да яҡлай алмай.*

***✓ Диндә төрлө йүнәлештәргә бүлеп, йәштәрҙең башын бутаусылар күбәйҙе хәҙер. Беҙгә үҙебеҙҙең дини юлбашсы, шәйех кәрәк. Шундай шәхес булмайынса тороп, дини тормошобоҙҙа тәртип булмаҫтыр.***

# Төкөрмәйем, сөскөрмәйем...

шын һүндерәләр. Армияла чечен егеттәре менән ныҡ аралаша торғайным. Уларҙа малайҙар һуғышһа, өлкәндәр тыймай икән.

Бынан бер егерме йыллап элек мәктәбебеҙ директоры Дәүләтбай Ибраһимовҡа ҡыҙҙар менән малайҙарҙы айырым уҡытыу зарурлығы хаҡында хат яҙғайным. Был хыялым тормошҡа ашманы, ул саҡта мөмкин дә булмағандыр инде. Дәүләтбай ағай мине мәктәптә уҡыған саҡта уҡ Зәки Вәлидов тип атап йөрөттө. Сөнки мин ул саҡта үҙебеҙ йәшәгән режимды тәнҡитләп, комсомол сафына ла инмәнем. Армияла сағымда ла унда инергә ҡыҫтанылар, тик мин баш тарттым. Хәрби часта - замполит, артабан да ҡайҙа ғына эшләһәм дә партком менән һыйышманым. Дөрөҫөн әйткәндә, тормоштоң шул саҡта уҡ "показуха"ға ҡоролғанын аңлап өлгөрҙөм. Етенсене бөткәс, йәйгелеккә фермаға хисапсы итеп ҡуйҙылар. Һауынсылар 17 һыйыр һауа, ә һөтөн 10 һыйырҙыҡы итеп күрһәтә. Алдынғы комбайнсыларҙың да ике комбайн эшләгәндә бергәүгә яҙҙырып миҙал алғанын беләм. Армияла саҡта сит илгә сығып китеү уйы ла булды. Тик әсәйемде йәлләнем. "Улың иленә хыянат итте", тип, уның орденын тартып алып, көн күрһәтмәҫтәр ине.

Колхозда эшләгәндә бер сменала 86 гектар майҙанда иген сәсеп, рекорд ҡуйып, Һаҡмар зонаһында чемпион исеме яуланым. Әммә миңә бының өсөн тейешле премияны бирмәнеләр. Комсомолға һәм партияға инмәгәнем өсөн. Ә гәзиттә сәсеүҙә бөтөнләй ҡатнашмаған партия ағзаһының исемен яҙып сығарҙылар. Комбайнда эшләгәнемдә лә, бункирым тулһа, оҙаҡ ваҡыт бушата алманым. Машиналар эргәмдән үтеп китәләр ҙә, башҡа комбайндар янына барып туктайҙар. Минең коммунистарҙы уҙып китеүемдән ҡурҡалар ине.

### Бурыслынан ҡасам...

Байҙарға халыҡ шикләнеп ҡарай. "Юҡлыҡ талаштыра, барлыҡ яраштыра", тиһәләр ҙә, донъялағы барлыҡ ыҙғыштарҙың, низағтарҙың, һуғыштарҙың нигеҙендә байлыҡ бүлешеү ята. Ошоно иҫәпкә алғанда, беҙҙең халыҡ вәкилдәренең сағыштырмаса бер кимәлдә булыуы милләтте берҙәм итәләр. Әммә был хәл беҙҙең милләт вәкилдәре ярлы булырға тейеш, тигәнде аңлатмай. 1978 йылда урманда эшләгәндә мин эсмәй башланым. Бер ваҡыт минең кеҫәлә 400 һумлап аҡса йыйылып китте. Совет заманы өсөн ҙур сумма ине был. Әллә мотоцикл алырға инде, тип тә уйлап йөрөнөм, әммә, мотоцикл алһам, аҡса бөтөр ҙә, үҙем ҡаҡҡа таянырмын һымаҡ тойолдо. Бер заман һиҙәм: бергә эшләгән иптәштәрем миңә шикләнеп, һағайып ҡарай башланы. Баҡтиһәң, уларға минең бай булыуым оҡшамай икән. Үҙемде унайһыҙ хәлдән сығарыр өсөн улар менән бергә эсә башланым. Йыйылған аҡсам теүәл бер аҙнаға етте, уның ҡарауы, иптәштәрем мине киренән үҙ итеп күрә башланы. Бының менән нимә әйтергә теләйем: беҙҙең халыҡта аҡсаға, аҡсалы кешегә ана шундай һүҙ менән аңлатып булмаҫлыҡ мөнәсәбәт бар. Беҙ аҡсаны яратып бөтмәйбеҙ, ә аҡса, психологтар әйтмешләй, яратҡан кешегә күберәк килеүсән. Ошоларҙан сығып, үҙегеҙ һығымта яһағыҙ инде.

Аҡсаға бәйле тағы бер сәйер ғәҙәтем: кешегә бурысҡа аҡса бирһәм, уны кире һорап алмайым. Мохтаж булһам, икенсе кешенән бурысҡа алһам алам, әммә үҙемә бурыслыға бер нәмә лә өндәшмәйем. Бурыслы кеше юлымда осраһа ла, уның менән бөтөнләй икенсе нәмә хаҡында һөйләшеп, тиҙерәк уның янынан китеүҙе хуп күрәм. Бурыслы үҙе минән ҡасырға тейеш булһа ла, уны күреп ҡалһам, ҡасып, икенсе юлдан китеүҙе хуп күрәм. Күрәһең, кешенең бурысын түләй алмайынса оялыуынан унайһыҙланамдыр, шуға ҡасамдыр инде.

Мин халыҡҡа аптырайым. Үткән быуаттың 30-сы йылдарында колхоз төҙөү башланғас, кулак мөһөрө һуғылған күптәр колхозға инергә теләмәгән. Хәҙер килеп, колхоздар юҡҡа сыҡҡайны, колхозһыҙ нисек көн итергә белмәйҙәр. Колхоздан башҡа көн итеүҙе бер нисек тә күҙ алдына килтерә алмаған бер апайға: "Колхоз төҙөгән ваҡытта бар мөлкәтте бергә ҡушҡандар, әйҙә, бар малыбыҙҙы, башҡа мөлкәтте бергә ҡушайыҡ та, киренән колхоз төҙөйөк", - тиһәм, үҙе мөлкәтен бирергә теше-тырнағы менән ҡаршы тора. Ҡыҫҡаһы, халыҡ хәҙер кире колхоз төҙөүгә лә ҡаршы һымаҡ, шул уҡ ваҡытта нисек итеп үҙаллы көн итергә лә белмәй, ике ут араһында тороп ҡалды. Беҙҙең яҡтағы Өмөтбай ауылы халҡы, мәҫәлән, кире колхоз дәүеренә ҡайтмаһаҡ ярар ине, тип теләйе.

### Үҙебеҙҙең шәйех кәрәк

"Ҡөрьән-Кәрим"де өс тапҡыр тотошлай уҡып сыҡтым, әммә аңлап бөтә алманым. Уҡыған һайын асыла бара ул китап. Шулай ҙа ни өсөн халҡыбыҙҙың дәррәү рәүештә дингә килмәүе хаҡында уйланам. Һәр ауылда тиерлек мәсеттәребеҙҙең ярым буш тороуы ошо эште ойошторорға бурыслы булған Башҡортостан мосолмандары диниә назараты эшмәкәрлеге, дөрөҫөрәге, эшләп еткермәүе арҡаһындалыр, тип уйлайым. Диндә төрлө йүнәлештәргә бүлеп, йәштәрҙең башын бутаусылар күбәйҙе хәҙер. Беҙгә, башҡорттарға, Башҡортостан мосолмандарына үҙебеҙҙең дини юлбашсы, шәйех кәрәк. Шундай шәхес булмайынса тороп, дини тормошобоҙҙа тәртип булмаҫтыр. Юғиһә, йәштәребеҙ ҡайҙалыр мәҙрәсә йә Ислам уҡыу йорто тамамлап, ауылға ҡайта ла, үҙебеҙҙең атай-олатайҙар ғүмерҙә ҡыланмағанды ҡыланып, халыҡты аптыратып, эш итә башлай. Дөрөҫөн әйткәндә, йәштәр ундайҙарҙан ҡурҡа һәм мәсеткә йөрөмәй. Мин үҙебеҙҙең Баймаҡ районы имам-хатибы Баймөхәммәт хәҙрәт менән аралашам. Уның дини аңлатмалары аңлайышлы һәм хәҡиҡәткә тап килә, тигән фекерҙәмен. Яңыраҡ уның менән аралашҡанда үҙемде күптән борсоған бер һорауға яуап алдым. Беҙҙең халыҡта алтынға бәйле бик күп тыйыуҙар бар бит инде. Шуларҙың береһе: ырым буйынса алтын ҡалаҡ менән ризыҡ ашарға ярамай. Ни өсөн? Күптәр быны алтындың һаулыҡҡа зыянлы булыуы менән аңлатырға тырыша. Әммә, хәҙрәт аңлатыуынса, бында мәсьәлә бөтөнләй икенсе нәмәгә бәйле: алтын ҡалаҡ менән ризыҡ ашаған йәки алтындан яһалған башҡа әйберҙә ҡулланған кешенең күңелендә маһайыу, башҡаларҙан үҙен өҫтөн ҡуйыу тойғоһо барлыҡҡа килә.

### Факт

Дарвин кешене маймылдан сыҡҡан тип иҫбатлап маташҡан. Унынса булһа, аттар тибенеп туйына, улар тауыҡтан сыҡҡан буламы? Дарвин, бәлки, үҙе маймылдан сыҡҡандыр. Кем белә лә, кем күрә? Ә мин кешенән сыҡҡанмын. Факт.

### Ниңә?

-Йондоҙҙарҙа, башҡа планеталарҙа беҙҙең кеүек кешеләр бармы икән?

-Бар...

-Ниңә һуң улар беҙҙең Ергә килмәй икән?

-Һе, кемден үҙе теләп психбольницаға килгәне бар...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Әкрәм Ҡәйепколовтың бер шәлкем шиғырҙарын да тәҡдим итәбеҙ. Уларҙы уҡып, һеҙ ҙә беҙ инанғанға инанырһығыҙ: ысын шағирҙарҙың күбеһе халыҡ араһында йәшәй.**

### Өшөмәһен халҡым

Ҡояш нурын ураным да ҡулдарыма,
Тартып ергә мин ҡояшты яҡынайттым.
Шәлкемдәрҙән ер өҫтөнә сатыр ҡорҙом,
Өшөмәһен бер ваҡытта, тиеп халҡым.

* * *

Ерҙе тотоп һелкетергә ине...
Өҙөлөп төшәр ине серек алма,
Ҡойолоп бөтөр ине яуызлыҡ,
Аҙғынлыҡҡа кейҙерергә йүгән,
Теҙгененән тотоп шаҡарырға
Булһын ине ҡорос ауыҙлыҡ.

Ерҙе тотоп һелкетергә ине...
Саң ҡаҡҡандай ҡаҡҡыларға ине,
Яуызлыҡтар унда ҡалмаһын.
Кешеләрҙең иген сәсеп талһын,
Ҡорал тотоп ҡулы талмаһын,
Ерҙе тотоп һелкетергә ине...

* * *

Мәңгелектең саҡҡыһы
Хыялдарым менән осоп
Ҡош юлынан уҙамын.
Мәңгелектең саҡҡыһы мин,
Сикһеҙ ғәләм туҙаны.
Мин булмаһам, серле донъя,
Ҡош юлы һуң буламы?

### Халҡыма

Йөрәгемде йолҡоп бирер инем,
Йөрәк сәскә түгел, ул кәрәк.
Һинең өсөн файҙаһы ла барҙыр
Күкрәгемдә типһә был йөрәк.
Аяҡ киреп ерҙә ныҡ торамын,
Ерҙә ныҡ баҫырға хаҡым бар.
Әҙәм бабабыҙҙың баш балаһы
Башҡорт тигән бөйөк халҡым бар.
Ятып түгел, илем, халҡым, тиеп
Ярһып туҡтаһасы был йөрәк.
Был донъяла бөтә йәшәйешем,
Хоҙайымдан бары шул теләк.

### Мостай Кәримгә

Мостай үлгән, тигән ауыр хәбәр
Өҙөп алһа ла ул бәғерҙе.
Алып китһә ине күңелдәрҙән
"Россиянмын" тигән дәүерҙе...

### Башҡаларға фәһем

Аҡылым да бар кеүек,
Иҫәрлек тә юҡ түгел.
Икеһен дә тиң күреп
Һыйҙырған минең күңел.
Ыңғай юл бара тигеҙҙән,
Тиҫкәре - һикәлтәле.
Холҡом мине һәр ваҡытта
Кирегә етәкләне.
Башҡаларға фәһем өсөн
Әл дә кире юл булған.
Минең абынғанды күреп
Күптәр кире боролған.

### Һайыҫҡан

Һандуғас, тип тыңлағаным
Булып сыҡты һайыҫҡан.
Бал ҡортоноң балы тиһәм,
Ағыу ҡалдырған йылан.
Ҡояш күргәс, йылы, тинем,
Сатнама һыуыҡ булған.
Һүҙҙәре татлы ине лә,
Эсе мәкерҙән торған.
Йомшаҡ йәйеп ултыртҡаны
Ҡаты һәндерә икән.
Ике йөҙлө булғандарҙы
Һуңлап беләһең икән.

### Белеп һайла

Бүре ташланған ваҡытта
Бергә йынтылһа эттәр.
Дуҫтарыңды белеп һайла,
Бүрене яҡлай күптәр.

### Китәләр

Һай, Уралым, тыуған ер, тип
Ғорурланып әйтәләр.
Әйтәләр ҙә, бәхилләшеп
Өфөләргә китәләр.

### Әҙер юлдар кәрәкмәй

Ҡаршы елдәр иҫә, ҡаршы барам,
Артҡа сигенмәҫмен бер аҙым.
Юлһыҙ барам. Мине алда көтә
Үҙем генә белгән моразым.
Йәнәшәмдә кемдер һуҡмаҡ һалған,
Әҙер юлдар миңә кәрәкмәй.
Сигенмәҫмен, әле ныҡ быуындар,
Ышанысың миңә терәктәй.
Аҡ бурандар миңә осҡан мамыҡ,
Ҡар юрғаны бары аҡ йүргәк.
Йомшаҡ ҡарҙар, бәлки, кәфен булыр,
Юлда туҡтап ҡалһа был йөрәк.

* * *

Ямғыр үтте, бала илай,
Ҡолаған икән тайып.
Йәйғор көлә еүеш ерҙең
Бөйөрөнә таянып.

### Белемсе

Яһалма ҡасырғанды
Үгеҙ ситтән ҡарап торған.
Дөрөҫ эшләмәне, тиеп,
Ул һуңынан әйтеп ҡуйған.
Кешегә лә, уның кеүек,
Тәүҙә еҫкәү кәрәк булған.




Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ТУЙ ДАУАМ ИТӘ

Хикәйә



Ғәлиә лә өй эсендәге ваҡ-төйәк мәшәҡәттәрен теүәлләгәс, ялан кәртәгә ябылған һыйырҙарын һауырға йүнәлде. Ире ишек алдында күренмәй, моғайын, әсәһенең янына хәл белергә ингәндер, уның менән көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп, шул кибеп бөткән ҡарсыҡтың кәңәштәрен тыңларға, тоторға әүәҫ бит ул. Тәүҙә елтән Алаҡайын һауып алырға итте. Үҙе менән тотоп сыҡҡан бәләкәй ултырғысты йәтешләп ҡуйып, уға ағас тирмәндәй йәйенке осаһын терәне, ҡыҫҡа тарбыҡ сатына биҙрәне ҡыҫтырҙы. "Минең менән арҡыры-торҡоро һөйләшһә лә, әсәһе менән сөкөрҙәшәлер әле... Ә бит бейеме килен булып төшкәндән алып уны мәрхәтһенмәне, йә кәңәш-төңәштәре, йә һүҙҙәре берекмәй..." Өйҙән эйәреп сыҡҡан сәкәләшеү шауҡымына әле мейеһен йыбырлатҡан асыуы ла ҡушылғайны, йәнендә биреһе ҡотороп, һөт менән тулышҡан еленгә сат йәбеште лә, имсәктәрҙе көсәнеп тартҡылай башланы. Бындай тупаҫ мөғәмәләне ҡабул итмәгән һыйыр артҡы аяҡтарын күтәреп, төбөнә буйтым һөт йыйылған биҙрәне әллә ҡайҙа, баһыу буйына ырғыта типте, тояҡ саҡ сикәһенә эләкмәне, кинәт артҡа янтайып, ялан кәртә уртаһында батмустай йәйелеп ятҡан "шыйыҡ ҡоймаҡҡа" ултыра төшөп өлгөрҙө. "Ҡороғор, мине типкән аяғыңды эт кимергер нәмәҫтәкәй!" Әсе тауыш менән сәрелдәп ҡарғанып, өйәҙәп ятҡан еренән туңҡаңлай-йөгөнөклә ҡалҡынды ла, еүешләнеп өлгөргән осаһын усы менән һыпырҙы, әммә йәшел үләндән генә хасил тиҙәк уның һайын ҙурыраҡ йәйелде, күлдәген эт алғыһыҙ итте, ҡулын бысратты. Туйтаңлап мал аҙбарына ҡаршы урынлашҡан мунса яғына атланы, өҫтөн һалып, ҡаҙанда кисәгенән ҡалған йылымыс һыуҙы тасҡа тултырып алып сайынды, йыуырға тип әҙерләгән керҙәр араһынан халатын табып кейҙе. Сығышлай бер яҡ ситтә тәгәрәп ятҡан биҙрәне беләгенә элде лә, өкәлтәктә сабырһыҙланып тыбызыҡлаған быҙауҙарҙы һыйырҙарға ҡушып, өй яғына йүнәлде. Шөғөлөнөң рәт-яйы киткәйне. Уның көйһөҙлөгөн һиҙгән Алабай ҡойроғон бот араһына ҡыҫып, арты менән өңөнә ҡарай шылышты. Инеп, биҙрәне түрбашҡа ҡуйып, залдағы диванға сумды ла, телевизор экранына тексәйҙе. Унда мөхәббәт хаҡында сериал күрһәтәләр ине. "Үәт, йәшәй бит башҡалар, ә! Әкиәттәгеләй мөғжизәле, йәмле, күңелле көн итәләр, килешле итеп кейенәләр, торлаҡтары хан һарайынан былайыраҡ. Рестарандарҙа тәғәмләнгән өҫтәлдәре һуң, нәзәкәтле ҡыланып мөғәмәлә итеүҙәре! Илереп ғашиҡ тотоуҙары эсмәйенсә башты әйләндерерлек, ҡауышыуҙары серле илаһилыҡҡа сорналған. Ә бит ысынында ундай тормош бар ерҙә, тик ул ырыҫлылар өсөн тәғәйенләнгән. Күк менән ер араһылай айырмалы ике донъя, әйтерһең, бер ваҡытта ла киҫешмәҫлек итеп йәнәш һалынған берләм һуҡмаҡ: береһенән ҡотлолар атлай, икенсеһенән уның ише өлөшһөҙҙәр. Ошонан аҙаҡ, ғәҙеллек бар ерҙә, тип әйтеп ҡара! Йәшә инде бына һуҡыр сысҡан ише ерҙә соҡоноп, һыйыр тиҙәгенә болғанып, бер ниндәй гүзәллек тә, нескәлек тә юҡ ерҙә. Ә бит уның да ғашиҡ утында янып йөрөгән саҡтары булманы түгел, булды. Анау мәҙәниәт бүлеге начальнигы Вәлитйән ашарҙай итеп ҡарап, яйы сыҡҡанда, аулаҡта, дәртте тоҡандырғыс итеп тығыҙ түштәренән, дерелдәк осаһынан һәрмәй торғайны бит. Ваҡыт үтеү менән шул ҡытыҡты килтергес һәрмәүҙәр төпкәрәк шылып, мөнәсәбәттәр тәрәнгә китте. Йәше урта саманан уҙып барғанда тоҡанған хистәре ихластан ине. Һаҡмарҙан һыу инеп ҡайтып килешләй сауҡалыҡта ашыҡ-бошоҡ сафлығынан яҙҙырғандан һуң, ҡайҙалыр китеп олаҡҡан Камилды иҫәпкә алмағанда, ошоғаса Вәлитйән һымаҡ уны бер кем дә яҡын күрмәне һәм уның һымаҡ бер кем дә артынан оҙаҡ ҡыялып йөрөмәне. Ә бит тәбәнәк буйын, тулҡын рәүешендә бүлкәтләнеп май ҡунған ҡабырғаларын, түш яғынан осаһына һыпыра тоташҡан билен, бер аҙ ҡамыт ҡыҫҡа аяҡтарын иҫәпкә алмағанда, төҫбашҡа анау тиҡый Фәрзәнәнән артыҡ булмаһа, һис тә кәм түгел. Ул эшләгән клубтың сәхнә артындағы бүлмәһендә дәртле ҡыҫышып, ирендәрҙе ҡанатҡансы үбешеүҙәрҙең емеше булып Рәмилгә ауырға ҡалды. Был хаҡта ишетеү менән Вәлитйәндең ауыл клубын ҡайта-ҡайта тикшереүе ҡырҡа һирәгәйҙе, бара-тора бөтөнләй туҡталды. Аптырағас, ғорурлығын еңеп, Ғәлиә район үҙәгенә бер нисә тапҡыр барып ураны, начальникты тап итә алманы, ул райондың башҡа клубтарын тикшерергә сығып киткәйне. Ауыр хәлдә тороп ҡалған Ғәлиә яйын тапты барыбер, эсе беленә башламаҫ борон уҡ бешкән дегәнәктәй Ғилманға һырыҡты. Тегеһе тиҡый Фәрзәнә менән күптән дуҫлашып йөрөһә лә, тәжрибәһеҙ һәм бер ҡатлы булып сыҡты, ҡулдарын үҙе йүнәлтмәһә, һәрмәү түгел, йүнләп ҡосаҡларлыҡ рәте лә юҡ ине. Киносеанс бөткәс, һуңғы ваҡытта ни сәбәптәндер яңғыҙы йөрөгән егетте теге бүлмәгә төртөп индереп, үҙенә көс һалып, этләнергә тура килде. Ярай әле, һуңынан шыма ғына китте. Теге һапалы юғары математик анализға оҫта булһа ла, ҡатын-ҡыҙҙың серле хисабына мәшәү икән дә баһа, белмәне лә, һиҙмәне лә, осрашыуҙарына аҙна самаһы үткәс, күҙҙәрен йәшләндереп "Һинән ауырға ҡалдым", тигәйне, яңы ҡапҡаға тексәйгән һарыҡ тәкәһеләй тупайтып ҡарап ышанды ла ҡуйҙы, ике һүҙҙең береһендә "Өйләнәйек"тән һалдыра башланы. Ғәлиәгә шул ғына кәрәк ине лә. Рәмил артынан Анжелика тыуҙы, шунан Эмилия. Гонаһы юҡ, һуңғы икәүһе тәғәйен Ғилмандан. Тимәк, бөтөнләй гонаһһыҙ һәм саф, йәш саҡта кем кемгә ғашиҡ булмай ҙа, кем кем менән йөрөмәй! Вәлитйән Ғәлиә кейәүгә сыҡҡас, "Беренсе һөйөү онотолмай ул", тип, бәйләнеште яңыртырға маташҡайны ла, Ғәлиә уны яҡынлатманы, "Мин - һине, һин мине белмәйһең", тип кенә ебәрҙе. Ауыл ерендә ир өҫтөнән икенсе берәү менән сыуалыуҙың хәтәр икәнлеген белә ине ул. Шуға гонаһлы йәнендәге аҙғынлығын боҫормаларға, баҫырырға үҙендә көс тапты. Ярай әле үҙенең аҫтыртынлығы, шылғаяҡлығы ярҙам итте, ауырға ҡалыуға килтергән мауығыуын белеүсе, һиҙеүсе булманы алай ҙа. Вәлитйән билгән вазифаһынан файҙаланып, ҡыҫымға алды, әүрәтеү, янау һөҙөмтә бирмәгәс, көсөнә һалышты. Начальниктың ҡаты үпкәләүе тиҙҙән асыуға күсте, асыуы ҡанығыуға ялғанды. Ул кәңәшмә һайын Ғәлиәне баҫтырып ҡуйып тәнҡитләр булып китте. Сыҙаманы эҙәрлекләүгә, эшенән сығып, аҙ-маҙ төйнәнгәндәренә төйөрөм генә кредит өҫтәп алып, яңы күтәрелеш ала барған алыпһатарлыҡҡа күсте.

Һөйләшкән-килешкән буйынса балалары, атап әйткәндә, Джон кейәүенең ғаиләһе, Андрей менән Эмилия туйға бер аҙна самаһы алдан ҡайтып төштө. Уға ҡәҙәр былай ҙа буяр ерҙе буяп, аушайған бағаналарҙы төҙәтеп ултыртып, көндәре үтә ине, ҡаланыҡылар ҡалған эшкә тотоноп киттеләр. Ҡатын-ҡыҙ ҡаралтыны сығарып елләтеп, тотош өйҙө йыуып рәткә килтерҙе, мунсаның ҡоромло стеналарын ағартып, иҙәнен ҡырып йыуып сыҡты. Ир-егеттәр Рәхимйәндең етәкселегендә аҫтында туй табыны барыр ерҙе киңәйтеп, оло ҡыуыш ҡорорға тотондо. Сәбилә әбей ятҡан иҫке йортҡа ғына оронманылар, сөнки стеналарынан балсығы ҡойолоп, түшәм таҡталарының серегә өҫкә яуған, тотош донъя аламаһы нышып тултырылған иҫке өйгә йәшәү рәүешен керетеү өсөн генә лә аҙна-ун көн самаһы мәшәҡәтләнергә тура киләсәк. Өҫтәүенә, унда быҙауҙар, һарыҡ-кәзә бәрәстәре ҡышлағас, торлаҡҡа елләтеп булмаҫлыҡ дәрәжәлә һыҡра еҫе һеңгән, ваҡыттары ҡалһа, тыш яҡтан аҡлаштырырҙар ҙа, инеп-сығып йөрөмәһендәр өсөн ишеккә йоҙаҡ һалырҙар, иң еңел юлы ана шул.

Иртәгә туй, тигән көндө ауылдан аралашҡан кешеләрҙе сәйгә алдылар ҙа, уларҙы оҙатып, үҙҙәре генә ҡалғас, өҫтәл артында ултырған Ғилман өй хужаһы булараҡ һүҙ башланы:

- Һый-ниғмәттәрҙе теүәлләп, донъяны ипләнек, иң мөһиме, туй тыныс үтһен инде. Өлөшөбөҙгә төшкән бурысты ҡайтарып бөтөүебеҙ ошо, бисәкәй. - Ҡатынының яғына һирпелеп алғас, ҡарашын башҡаларға күсерҙе. - Ни тиһәң дә, оло йыйын бит, Рәмил, өлкән булараҡ, төп эштәр һинең өҫтә, ә һин, Джон кейәү, уға ярҙам итерһең. Уйылдан ҡусты уландары менән килә лә бит, ни тиһәң дә, беҙҙән алыҫ ятҡандар мәшәҡәттең яйын-рәтен белмәҫтәр. Ҡапҡа төбөндә ҡаршы алыу - килендәргә, машиналарҙы урынлаштырыу, Джон кейәү, ГАИ булараҡ -һиңә. Ишек алды яландай иркен, һыйырҙар әле. - Шунан кейәү булаһы егеткә, Эмилияға һирпелде. - Һеҙгә эш ҡушмаҫбыҙ, үҙ мәшәҡәттәрегеҙ ҙә баштан ашҡан.

- Яҙылыу сельсоветталыр? - тип һорау ҡыҫтырҙы Анжелика.

- Бәрәмәс, шунда, башҡа ҡайҙа булһын! - Ауыҙын тултырып көйшәгән Ғәлиә сәйнәгәнен сынаяҡ аҫтындағы сәй менән шыйыҡлап төшөрөп ебәрҙе лә, элә һалып алды. - ЗАГС-ты ҡоҙалар аңламаҫ, ҡабул итмәҫ, тип, һәммәбеҙ аңлаған телдә апарырға әйткәйнем дә, Ибраһимдың теле ул яҡҡа ҡаты бит. Шуға йоланы атҡарыуҙы урыҫса матур ғына һупалаған уҡытыусы Хөмәйрәгә йөкмәтергә хәл иттеләр, уның ҡайҙа эшләп йөрөгәнен кем генә төпсөнөп торор тиһең...

- ЗАГС-тан һуң мәсеткә, шунан һуғышта ятып ҡалғандарҙың һәйкәленә барып, сәскәләр һалыу модала... - Быны Рәмилдең ҡатыны Әлфиә өҫтәне.

- Батаны теге парторг Шәрифйән уҡыр инде, тигәйнек, бер аҙна башын да ҡалҡытмай эсеп, бахмурҙан ята, ғибрәт. Ә һәйкәлгә килгәндә, бағып, ҡарап тормағас, уны дегәнәк, кесерткән баҫҡан. Так што, юҡ-бар менән булашмаҫбыҙ. - Был турала ары сурытырға теләмәгән хужабикә иғтибарҙы икенсе мәсьәләгә йүнәлтте. - Йоҡлауға килгәндә, һарай башы иркен, яңы сабылған бесән йәйеп һалһаҡ, йәш-елкенсәк шунда төнәр, ә өлкәнерәктәрҙе, Рәмил, һеҙгә апарырбыҙ, Ғиндулла олатайыңдың, уның улы менән ҡыҙының өйөнә таратырбыҙ.

- Иң мөһиме, араҡыны йәлләмәй ҡояйыҡ, тәгәрәгәнсе эсәйек, иң шәп, күңелсәк ҡунаҡ - иҫерек ҡунаҡ! - тине Джон.

- Эсәйек, тип күҙҙәреңде майландырып ултырма, йәме, һин ҡойоусы ғына, - тип иҫкәртә һалды Анжелика.

- Хәҙер күп урындарҙа араҡыһыҙ туй үткәрәләр, - тине Әлфиә.

- Булдыҡ беҙ ундай туйҙа. Ир-ат аҙбар яғына барып, ҡасып-боҫоп йотоп килә лә өҫтәл артында суфый ише ҡылана. Лучше йәшермәй эсһен дә ҡуйһындар. Ниңә үҙеңде лә, башҡаларҙы ла алдарға! - Анжелика ҡушылып китте.

- Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, кемдеке - шуныҡы, туй матур, иң мөһиме, ыҙғышһыҙ үтһен, - тип һөйләшеүҙе йомғаҡланы Ғилман.

Ҡунаҡтар, "Күрегеҙ, бына беҙ ниндәйерәк", тигәндәй, тиҫтәнән ашыу сит ил машиналарына тейәлеп, кемуҙарҙан пипелдәтешеп, ҡош-ҡорт өркөтөп, эт өрҙөрөп, туҙан борхотоп, Сабир ауылын бер тапҡыр уранылар ҙа, Ғилмандарҙың ҡапҡа ауыҙына килеп туҡтанылар. Унда баҫҡан йәш килендәр, Джон менән Рәмил ҡунаҡтарҙы араҡы, һыра, кеүәҫ эсереп, колбаса һоғондороп үткәрә башланы.

- Драстуйте! - Ғәлиә эркет гөбөһөләй йыуан, саҡ байпаңлап атлаған ҡоҙағыйына ҡаршы йүгермәләп барҙы ла, ике ҡулын һоноп күреште. - Как доехали? - Көн һайын аралашмағас, һөйләшеүе ошо ерҙә өҙөлдө, ул һүҙен күтәрмәләүгә өмөт итеп, эргәһендәге Анжеликаһына һирпелде.

- По проселочной дороге долго ехать, от жары и от пыли чуть с ума не сошла! - Мария Петровна йөҙөн ризаһыҙ сирып, ерән төҫкә буялған ҡыҫҡа сәстәрен, тирле маңлайын ҡул һырты менән һыпырҙы, шунан уның өсөн генә айырым батмуста килтерелгән рюмканы сытыраймай ғына түңкәреп, ирендәре үтә ҡыҙыл помада менән ҡайылған йәйенке ауыҙын төйөрөм колбаса киҫәге менән томалап ҡуйҙы. Бер аҙҙан икенсе рюмка ла тәүгеһенең артынан юлланды һәм дәү, мискәләй ҡорһаҡтан ҡәнәғәт кикереүҙе ҡыуалап сығарҙы. Ниһайәт, һимеҙ биттәргә алһыулыҡ бөркөлдө, маңлай һырҙары яҙылды. - Но у Вас тут красиво, не тронутые цивилизацией райские места... - Шешенке ҡабаҡтарын яҙып, алыҫта киртләсләнеп күренгән тауҙарға, үҙәндән бормаланып аҡҡан Һаҡмарға, ауылға терәлеп тиерлек ҡалҡҡан ҡайын урманына ҡыҙыҡһыныусан ҡарашын атты.

- Мәтрүшкәле ҡайын миндеге ебетелгән, кәрәк-яраҡ та әҙер, мунсаға саҡыр, Анжела!

Ҡалған ҡунаҡтарҙы сәй табыны артында һыйлауға апаруҡ ваҡыт китһә лә, төп ҡоҙағый мунсанан сығырға ашыҡманы. Сәғәт ярым самаһы юғалып торғандан һуң, эс майы һәм янбаш целлюлиты туғарланып, аҫҡа һалынған килбәтһеҙ кәүҙәһен көскә һөйрәп, ах та ух килеп, тышылдап соланға сыҡты ла, әҙерләп ҡуйылған кеүәҫте төп күтәрә ебәргәс, баяғынан да ҡеүәтлерәк итеп геүелдәтеп кикерҙе, шунан беренсе һорауын бирҙе:

- Есть ли в ваших краях другие деревни?

Тел төбөн шунда уҡ төшөнөп алған Ғәлиә ҡабаланып-ҡарһаланып яуап бирә һалды:

- Есть. Васильевка. Пятнадцать километров от нас...

- Есть ли там церковь?

- И церковь есть, и поп там...

- После ЗАГСа поедем туда! - Мария Петровна кире ҡаҡҡыһыҙ бойороулы тонда шулай тине лә, сиркәүгә барыу сәбәбен төшөндөрөп ҡуйҙы. - В церковь хожу только по большим религиозным праздникам, и в бога я не верю. Но обожаю внешний атрибут, люблю шоу. Наше посещение будем снимать на видео, потом будем показывать друзьям. Для этого с собой взяли профессионального оператора.

**(Дауамы бар).**

**Балет Италияла синтетик сәнғәт булараҡ барлыҡҡа килгән жанр. Белгестәр әйтеүенсә, ул кешелек цивилизацияһының иң юғары ҡаҙанышы. Үҙ заманында Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһендә ҡуйылған "Гөлнәзирә", "Тау бөркөтө", "Айгөл иле", "Ҡара йөҙҙәр" кеүек милли спектаклдәрҙе олораҡ быуын яҡшы хәтерләйҙәр һәм бөгөн дә башҡорт балеты бар икән, быны халҡыбыҙ мәҙәниәтенең бейеклеге булараҡ ҡабул итергә кәрәк. Әлеге ваҡытта балет сәнғәте ниндәй уңыштар кисерә? Яңыраҡ тамамланған Рудольф Нуриев исемендәге XVIII Халыҡ-ара балет сәнғәте фестиваленең әһәмиәте нимәлә? Ни өсөн театр сәхнәләрендә милли әҫәрҙәр аҙ ҡуйыла? Ошолар тураһында Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бейеүсеһе, балетмейстер-хореограф, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ринат Әхтәм улы АБУШАХМАНОВ менән һөйләшәбеҙ.**



# МИЛЛИ БАЛЕТ ҠУЙҺАМ...

## ул мотлаҡ Урал батыр тураһында буласаҡ

### Балет артисы һөнәре

Балет артисы артыҡ тырышлыҡ һәм көс түгеп хеҙмәт итә торған һөнәрҙәрҙең береһе. Балетҡа бала аңлы рәүештә, сәхнәгә сығам, тигән хыял менән килә, әммә һайлаған һөнәренең ауырлығын уҡып бөтөп, театрҙа эшләй башлағас ҡына аңлай. Мин дә балетҡа аңлы рәүештә, үҙем теләп килдем. Бер танышым Башҡорт хореография училищеһында (хәҙерге Башҡорт хореография колледжы - **ред.**) уҡый ине, шуға ла мин ошондай уҡыу йорто барлығын белә инем, берҙән-бер көндө унда уҡып ҡарау теләге уянды. Шулай мин ун йәштән үҙемдең тормошомдо ошо сәнғәт төрөнә арнаным. Бер башлағанды ташлау ғәҙәтем юҡ, балет артисы булмаһам, икенсе һөнәр һайлармын, тип уҡып бөтһәм дә, театрға эшкә килгәс, солист булып, алдынғы партиялар башҡарыу бәхете эләкте. Киләһе йыл Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында эшләүемә ун биш йыл тула. Был бейеүсенең сәхнәләге ғүмеренең дүрттән өс өлөшө тигән һүҙ. Ошо ваҡыт эсендә башҡарған ролдәремде, партияларымды анализлап, баһалап ҡарағаным юҡ. 2008 йылда Санкт-Петербургта А. Ваганов исемендәге Рус балеты академияһын тамамлап, балетмейстер-хореограф дипломын алғайным, шуға ла әлеге мәлдә бар хыялым, эшем, барлыҡ көсөм сәхнәләштереү менән бәйле. Бейеүсе булыу ҙур физик көс талап итһә, хореограф булыуы күберәк эмоциональ-аҡыл йәһәтенән көсөргәнешле.

Һуңғы ваҡытта бейеүсе булараҡ сәхнәгә йыш сыҡмайым, сөнки балет - ул йәшлек, матурлыҡ сәнғәте, шуға ла унда йәштәр бейергә тейеш. Башлыса оло, тәжрибәле артистар башҡара торған Гәрәй хан, Ганс, Бөйөк Брамин кеүек ҡатмарлы партияларҙы башҡарам. Уларҙың барыһы ла драматик партиялар, унда бейергә генә түгел, актер булараҡ уйнарға ла кәрәк, ә быларҙың барыһына ла тәжрибә аша килә. Әлбиттә, башҡарырға хыялланған ролдәрем бар ине, әммә улар ваҡытында тормошҡа ашмағас, бөгөн үҙенең әһәмиәтен юғалтҡан. Хәҙер инде балетмейстер-хореограф булараҡ ошо мәлдең бушҡа үтеп китеүен теләмәйем. Минә тиклем Өфөлә дипломлы балет ҡуя торған белгестәр юҡ ине, был йәһәттән мин беренсе һәм әлегә берҙән-бер белгес. Шуға ла етәкселәр ҡайһы саҡта минең менән нимә эшләргә белмәйҙәр кеүек тойолоп китә. Икенсе яҡтан, Өфөлә "Аҡҡош күле", "Щелкунчик" кеүек бер нисә классик балетҡа ғына кеше йөрөй һәм шуға ла ошо балеттарҙы ғына ҡуйырға кәрәк, имеш, тигән ҡараш бар. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, Боронғо Римда һәм Грецияла ниндәй тамашалар иң популяры булған? Әлбиттә, кеше үлтереү. Ул табыш та килтергән, күмәк тамашасы ла йыя алған. Әгәр ҙә артабан да спектаклдәр ҡуйыуҙы тамашасының талабына һәм кимәленә ярайым тип кенә атҡарһаҡ, беҙ ҙә ошо көнгә төшөүебеҙ бар. Театр тамашасының мәҙәниәтен үҫтерергә тейеш - уның төп функцияларының береһе тап ошонда.

### Фестивалгә яңы һулыш кәрәк

Әле яңы ғына Рудольф Нуриев исемендәге XVIII Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивале тамамланды. Уның беҙҙең театр, артистар һәм, ғөмүмән, дөйөм балет сәнғәте өсөн әһәмиәте тураһында уйлайым да, үҙемдең һорауҙарыма үҙем яуап таба алмайым. Быйыл фестивалгә махсус саҡырылған билдәле хореограф Юрий Григорович "Корсар" спектаклен ҡуйҙы, тиерҙәр. Ләкин планға ярашлы, театр йыл да бер балет спектакле ҡуя, тимәк, был фестивалгә үтһә лә, үтмәһә лә, ул спектакль ҡуйыласаҡ ине. Фестивалгә бары тик илдең төрлө театрҙарында бейеүсе солистар килә. Үкенескә күрә, театрҙар, труппалар, яңылыҡ булырҙай спектаклдәр, ҡыҙыҡлы режиссер, балетмейстер эштәре саҡырылмай. Шуға күрә бында үҫеш тураһында түгел, бары тик ниндәйҙер дуҫтарса орашыу тураһында ғына һүҙ йөрөтөп булалыр, тием. Афишала солистың исеме эргәһенә Мәскәү, Ҙур театр тип яҙылған булһа, был спектаклгә киләсәктәр, тимәк, фестиваль яҡшы үтте, тигән фекер ҡаласаҡ. Шуға ла был фестивалдең формаһын үҙгәртергә кәрәк, тип уйлайым. Мәҫәлән, бер йылды солистарҙы, икенсе йылына бер нисә яңы спектакль саҡырырға була.

Бөгөнгө көндә балет донъяһында бар ҡаҙаныштарҙы Нуриев исеме менән бәйләргә тырышалар. Был исемде күтәреү, уның менән йәш тамашасыларҙы таныштырыу формаһы ла юҡ был фестивалдең. Уны Григорович йәки балетта киң билдәле тағы берәй исем, әйтәйек, Мариус Петипа менән атаһаң, ошо уҡ формалағы фестиваль килеп сығыр ине. Бөгөнгө көндә балет сәнғәте техник яҡтан үҫешеп, ниндәйҙер бер түбәгә етеп килә. Ул ике йүнәлештә - заманса һәм классик хореографияла үҫешә. Бөгөнгө көндәң заманса хореографияһы - ул авторлыҡ хореографияһы. Унда режиссерҙар фамилиялары ғына яңғырай, был шарттарҙа бейеү генийы булырлыҡ артист үҫә алмаясаҡ. Ә классик балет үҫеше бөтөн донъяла көрсөк кисерә. Нуриев, Барышниковтар күтәргән кимәл бик юғары, уға етеп, бәлки, саҡ ҡына алға китеп тә булыр, тик балет сәнғәте ниндәйҙер яңы юлға ғына төшмәһә, унда ҙур аҙым менән алға атлап булмаясаҡ. Әле барған үҫештә һәйбәт бейеүселәр, балериналар, Франция балетында әйтелгәнсә, этуалдар бар, улар булған, буласаҡ, әммә реформа эшләрлек кешеләр һәм хатта уны эшләү өсөн нигеҙ ҙә юҡ бөгөн. Тәнҡитселәр әйтмешләй, хореографияла яңы юлдар, яңы темалар, яңы сюжеттар, яңы формалар юҡ. Был балетта ғына түгел, драмала ла, кинола ла шулай кеүек.Беҙ һаман да иҫкене сәйнәйбеҙ, шуға бөгөн 30-40 тапҡыр редакцияланған классик репертуар ҡуйыла ла ҡуйыла. Шул уҡ "Корсар" беҙҙең театр өсөн ваҡиға булһа ла, балет масштабында яңылыҡ түгел һәм уны ҡуйып, театр алға яңы аҙым эшләй ала, тип уйламайым.

### Миллилек костюмда ғына түгел

Балетмейстер-хореограф булараҡ, милли балеттар ҡуйырға хыялланам. Әлеге мәлдә театрҙа милли әҫәрҙәргә, спектаклдәргә иғтибар юҡ. Нуриев фестивале сиктәрендә Рәсәй балеты йондоҙҙары ҡатнашлығында ойошторолған Гала-концертҡа "Умырзая" тигән хореографик миниатюра ҡуйғайным. Башҡорт легендаһы буйынса эшләнгән милли колоритлы, ләкин заманса миниатюраға Николай Попов музыкаһы яҙҙы. Ул тамашасыға ла, тәнҡитселәргә лә оҡшаны, сөнки ҡыҙ менән егеттең бер-береһен яратыуы, әммә бергә була алмауы - ул мәңгелек тема һәм ул һәр ваҡытта ла кеше күңеленең ҡылдарын тирбәлдерә ала. Ниндәй генә легендаһыҙҙы, эпосыбыҙҙы алма, уларҙың һәр береһендә балет өсөн әҙер темалар, сюжеттар бар. Беҙҙә ни өсөндөр милли әҫәр ҡуйылһа, сәхнәлә мотлаҡ тирмә торорға, ҡыҙҙарҙың кейемдәрендә тәңкәләр булырға, егеттәр итектә бейергә тейеш, тигән стереотип йәшәй. Әммә был атрибуттар ғына спектаклгә миллилек өҫтәй алмай. Иң башта ул кеше күңеленә үтеп инергә тейеш. Әле репертуарҙағы "Сыңрау торна" спектакле һуғыштан һуң ҡуйылған, бер нисә тапҡыр эшкәртелеп, кире тергеҙелгән һәм бөгөнгө көнгә тиклем бара. Тимәк, ул спектаклде барыһы ла ҡарай. Сюжеты, ниндәйҙер күңел хистәре бөтөн кешегә лә яҡын булһа, башҡа милли спектаклдәрҙе лә тамашасы яратасаҡ.

Бөгөн минең милли спектакль ҡуйыу мөмкинлегем булһа, ул "Урал батыр" эпосы буйынса ҡуйылыр ине. Элек донъяны өс кит тотоп тора, тип иҫәпләгәндәр бит әле. Минеңсә, бөтөн башҡорт донъяһы ошо әҫәр-кит өҫтөндә тора. Образлы яҡтан да балет өсөн бик ҡыҙыҡлы тема булыр ине ул.

### Сәнғәт килем килтерә алмай

Бөгөн тамашасы балетҡа йөрөмәй, тип әйтһәк, был бик дөрөҫ булмаҫ ине. Беҙҙең ҡалала халыҡ иҫәбе әллә ни ҙур түгел, шулай ҙа "Аҡҡош күле", "Щелкунчик" нисәмә йылдар рәттән һәр ваҡыт тулы зал йыя ала икән, тимәк, халыҡ театрға йөрөй. Балет нимә ул, тип һораһаң, күптәр "Аҡҡош күле" тип яуап бирәсәк. Ғөмүмән, аҡҡош - ул балет образы һәм һәр тамашасы ошо аҡҡоштo үҙ күҙе менән барып күрергә теләй. Ошо урында бер хәлде һөйләмәйенсә булмай. Әсәйем бәләкәй саҡта Өфөлә уҡып йөрөгән өлкән апайы уға бүләк итеп балет тапочкаһына оҡшаш аяҡ кейеме алып ҡайтҡан. Шул тапочкаһың осона ғына баҫып, мин - аҡҡош, тип йүгереп йөрөй торғайным, тип бөгөн дә иҫләй әсәйем. Телевизор булмаған ауылға аҡҡош образы барып еткән һәм унда йәшәгән бала күңелен елкендергән икән, ул образ бөгөн дә тамашасыны үҙенә ылыҡтыра аласаҡ. Бәлки, бының өсөн театрҙы ябай тамашасыға саҡ ҡына яҡынайтыу мөһимдер. Бер нисә йыл элек кенә республика ҡалаларына гастролдәргә сыға инек, был матур йола ла юҡҡа сыҡты, сөнки был сара килем килтермәй, тигән ҡараш өҫтөнлөк итә хәҙер. Әбит ысын сәнғәт бер ҡасан да матди файҙа килтерә алмаясаҡ.

Сәнғәт өлкәһендә хеҙмәт иткән кеше лә бер ҡасан да күп итеп аҡса табыуҙы беренсе урынға ҡуя алмай. Шул уҡ ваҡытта сәхнә тормошо менән генә йәшәп тә булмай. Билдәле сәнғәт белгесе, тәнҡитсе Александр Максов әйтеүенсә, романтизм осоронда балет сәнғәте киң танылыу яулаған ваҡытта Нуриев кеүек үҙ заманының йондоҙҙары, әйтәйек, Италия балеринаһы Мария Тальонизар түләктең егерме дүрт сәғәтен дә балет залында үткәргән һәм тик балет тураһында ғына уйлаған. Ә бөгөнгө балериналар иртәнге репетициянан һуң балаһын мәктәптән барып алып өлгөрәме, юҡмы, киске репетицияларға, спектаклдәргә йүгерә һала. Көндәлек эштәрҙе башҡарыу күп энергияны ала һәм балетҡа уның яртыһы ғына ҡала, сөнки кеше ресурстары сикһеҙ түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры рус классик балетына нигеҙләнеп эшләһә лә, был сәхнәлә электән башҡорт хореографияһының традицион формалары ла киң ҡулланыла. Башҡорт балетының "алтын осоро" тип аталған йылдар, башҡорт спектаклдәренән торған репертуар, бөтөн донъяла бейеү генийы иҫәпләнгән Рудольф Нуриевты балетҡа ғашиҡ иттергән Зәйтүнә Насретдинова кеүек бейеүселәр - былар барыһы ла тарихта ғына ҡалмаҫ һәм башҡорт балеты бөгөнгө геройыбыҙ кеүек йәштәр иҫәбенә яңы һулыш кисерер әле, тигән ышаныста ҡалайыҡ. Балет - ул ысынлап та ҡабатланмаҫ сәнғәт һәм бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамайынса, уға үҙендең тормошондо арнарға ла мөмкин, сөнки был тормошта моң һәм бейеүҙән башҡа бер нәмә лә мәңгелек түгел.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

✓ Юғары Хәрби-сәйәси училищеһына уҡырға алынғайны, ләкин атайымдың, сит яҡта ҡалма, мәрйә-фәлән алып ҡуйма, тип ҡәтғи тыйыуына буйһоноп, тыуған яҡҡа әйләнеп ҡайтты.



ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЙҘЕ КҮП ИТЕП...

## тик һөтһөҙ эс

■ Тәүлегенә 8 сәғәт йоҡлау - йәш булып ҡалыуҙың нигеҙе. Ғалимдар иҫбатлауынса, даими рәүештә йоҡо туймау организмды ваҡытынан алда ҡартайыуға дусар итә, шулай уҡ йоҡо баш мейеһе эшмәкәрлеге өсөн дә мөһим. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, төнгө йоҡоноң ҡыҫҡа булыуы организмдың үтә мөһим функцияларының боҙолоуына һәм биологик үҙгәрештәргә килтерә. Йоҡо туймау матдәләр алышыныуы, гормональ һәм эндокрин системаһы эшмәкәрлеге боҙолоуына алып килә. Тәжрибәлә ҡатнашыусы йәш егеттәр тәүлегенә 4 сәғәт кенә йоҡлай, һөҙөмтәлә уларҙың ҡанында глюкозаның, шулай уҡ стресс гормоны - кортизол артыуы һәм гормональ баланстың үҙгәреүе күҙәтелә. Эксперименттарҙа ҡатнашыусыларға 12 сәғәт йоҡлап алырға рөхсәт бирелгәндән һуң был симптомдар юҡҡа сыға.

■ Туҡлыҡлы иртәнге аш кешегә көн дауамында төрлө эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн энергия бирә, мейенең дөрөҫ эшләүен тәьмин итә, метаболизмды тиҙләтә. Быларҙың барыһы ла кәүҙәне һомғол көйө һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Иртәнге сәғәттәр - тәм-том менән һыйланыу ваҡыты ла, тип белдерә Тель-Авив университеты ғалимдары. Сөнки был ваҡытта матдәләр алышыныуы яҡшы эшләй һәм артыҡ калориялар шунда уҡ янып юҡҡа сыға. Профессор Даниэль Якубович әйтеүенсә, иртән мотлаҡ шоколад ашаһаң, көнө буйы татлы ризыҡтар ашағығыҙ килмәйәсәк.

■ Инглиз ғалимы, Лондон университетының фитохимия профессоры Симон Гиббонс раҫлауынса, көнөнө өс сынаяҡ ҡына яңы бешерелгән сәй эсеү сәләмәтлекте һаҡларға мөмкинлек бирә. Сәй эсергә ғәҙәтләнеү баш мейеһе шеше, инсульт, төрлө инфекциялар кеүек ауырыуҙарҙы булдырмай. Нидерланд ғалимдары 1996 йылда уҡ сәй эсергә яратыусыларҙа инсульт һирәк осрауын билдәләгән. Ҡара сәйҙәге флавоноидтар артерияларҙы һәм ҡан тамырҙарын зарарлы холестериндан һаҡлай. Белгестәр әйтеүенсә, бында сәйҙең йәшел йәки ҡара, шәкәрле йәки шәкәрһеҙ булыуы мөһим түгел. Сәйҙе тик һөтһөҙ эсергә кәрәк, сөнки һөт организмға эсемлектең файҙалы матдәләрен үҙләштерергә ҡамасаулай.

■ Великобританияның биотехнологик компанияһы томаттан яңы дарыу уйлап сығарған. Тикшеренеүҙәрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары менән сирләүсе 150 кеше ҡатнаша һәм уларҙың барыһында ла был препаратты ҡабул иткәндән һуң холестерин күләме кәмегән. Ғалимдар быны томаттарға ҡыҙыл төҫ биреүсе каротиноид пикопен менән бәйләй. Тиҙҙән был дарыуҙар Англия дарыуханаларында һатыла башлаясаҡ.

■ Генетик яҡтан эсәк яман шешенә биреүсе кешеләр фолий кислотаһына бай аҙыҡ-түлек ҡулланып, сирҙе иҫкәртә ала. Уларға көн һайын яҡынса 400 грамм фолий кислотаһы ҡулланырға кәрәк: ул бигерәк тә шпинатта, брокколиҙә, кәбеҫтәлә, бауырҙа күп.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, кеше организмы өсөн иң файҙалы музыка - классик музыка һәм халыҡ фольклоры. Яратҡан музыка тыңлау ҙа кешегә ыңғай тәьҫир итә, ти белгестәр. Ул ҡан тамырҙарының эшмәкәрлеген яҡшырта һәм ҡан йөрөшөн 25 процентҡа тиҙләтә, ә күңелгә ятмаған музыка иһә ҡан тамырының 6 процентҡа тарайыуына килтерә.

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ ИР-АТ



**Алтын ҡуллы, һөнәрле егеттәр тормошта һәр саҡ ышаныслы була. Кем кем, әммә ҡатын-ҡыҙ заты ир-егетте иң беренсе булдыҡлы, һөнәрле булғаны өсөн ихтирам итә һәм ярата. Хатта таҡмаҡтарҙа ла: "Ат туғарып егә белмәй, ҡыҙҙар һайлаған була", - тип эшлекһеҙ егеттәрҙе тәнҡитләгән бит халҡыбыҙ.**

# ӨЙ ҺАЛДЫ, АҒАС УЛТЫРТТЫ...

## ул-ҡыҙҙар үҫтерә...

Беҙ биш бала үҫтек. Дүрт ҡыҙ араһында үҫкән энем, Фәссәхов Әғзәм Фәйзрахман улын, бишенсelә уҡығанда уҡ атайым Өфөләге музыка тәрбиә биреүсе мәктәп-интернатҡа уҡырға бирҙе. Бәләкәй сағынан уҡ Әғзәм йырлай, бейей ине, алты йәшендә клуб сәхнәһендә сығыш яһай башланы. Бәләкәйҙән үк теләһә ниндәй эшкә ҡурҡмай тотондо ул. Ниндәй генә тормош шарттарына эләкһә лә, теләһә ниндәй ауырлыҡты күтәрә алырлыҡ эшһөйәр, булдыҡлы малай булып үҫте. Алдаша белмәй, буш вәғәҙәләр бирмәй, тайғаҡ юлдарҙан атламай. Тура һүҙле, талапсан ир-егет, өлгөлө атай.

Һөнәрҙәре һанап бөтөргөһөҙ. Ауыл малайы булғас, әлбиттә, ат туғарып егә белә, бесәнде, алдын киң алып тороп, саба, матур итеп, инәйем әйтмешләй, ҡыптырҙатып, күбәләр һала. Салғы тапай, һәнәктырма яһай, йүнәтә, күкрәкләп тороп кәбән-эҫкерт ҡоя. Малды ҡәҙерләп ҡарай, ҡош-ҡортто, ваҡ малды үҙе сала, һуя, тунай, башынан алып аҙағына тиклем эш итә. Һыйыр малын һуйғанда ла ситтән, ҡулын биленә таянып, ҡарап тормай, йүгереп йөрөп ҡатнаша. Бәләкәйҙән үк усаҡ-ҡаҙан янында булды, ҡырҙа тәмле итеп аш бешерҙе, сәй ҡайнатты. Студент сағында, көндөҙгө бүлектә уҡыһа ла, ғаилә ҡорҙо, ике, ҡайһы саҡта өс эштә эшләне. Стәрлетамаҡта үҫмерҙәр колонияһында эшләгәндә лә тәрбиәләнеүселәре өсөн өлгө булды. Өлкән тәрбиәсе, лейтенант званиеһына лайыҡ булды. Университетты уҡып бөткәс, тәүге йыл үҙ аллы йәшәй башлағанда уҡ, ер алып, баҡса сәсте, үҙе үҫтергән томаттарҙы, ҡыярҙарҙы оҫта тоҙларға өйрәнде, уларҙан салаттар эшләне. Былау, флот макарондарын бешерһенме - телде йоторлоҡ килеп сыға...

Мәктәп-интернатта уҡығанда тәртип ҡаты ине, ысын мәғәнәһендә һалдат тормошо булды. Бәләкәйҙән оло яуаплылыҡ тойоп, етди эштәр башҡарҙы махсус музыка белеме алған балалар. Әғзәм валторнала уйнаны. Унан тыш, фортепианола, гитарала, электро- һәм һуҡма уйын ҡоралдарында уйнарға өйрәнде. Бөгөнгө көндә лә Илсекәй төп мәктәбендә, инглиз теле уҡытыуҙан тыш, музыка дәрестәрен алып бара. Баянда, гитарала уйнай, матур итеп йырлай, мәктәптә һәм ауыл мәҙәниәт йортонда ойошторолған сараларҙа әүҙем ҡатнаша.

Туғыҙынсы класты тамамлағас, хәрби командирҙарҙың оркестрҙа хеҙмәт итергә саҡырыуына ҡушылып, 16-сы йәше менән генә барыуына ҡарамаҫтан, Калининградҡа юлланды. Данлыҡлы Балтик флотының Калининградтағы Комендатура оркестрында тәүге ике йылда тәрбиәләнеүсе генә булһа, аҙаҡ, 1975 йылға тиклем, матрос булып, барыһы биш йыл хеҙмәт итте.

Ваҡытын бушҡа әрәм итмәне унда, киске мәктәптә уҡып, урта белем тураһында аттестатты ҡулына алды, СССР Хәрби-Диңгеҙ Флоты юғары командованиеһының төрлө рәсми делегацияларын оҙатып йөрөгәндә, Финляндияла, Швецияла, ГДР-ҙа, Польшала булырға, сит илдәрҙе күрергә, донъя гиҙергә өлгөрҙө. Хеҙмәте тамамланыр алдынан Украиналағы Львов Юғары Хәрби-сәйәси училищеһына уҡырға алынғайны, ләкин атайымдың, сит яҡта ҡалма, мәрйә-фәлән алып ҡуйма, тип ҡәтғи тыйыуына буйһоноп, үҙенең дә Башҡортостандан башҡа ерҙә йәм тапмаҫын белгәнгәлер, тыуған яҡҡа әйләнеп ҡайтты. БДУ-ның роман-герман филологияһы факультетына уҡырға инде һәм инглиз, француз телдәре белгесе булып уҡып сыҡты. Теләһә - уҡыта, теләһә - хөкүмәт хеҙмәтендә тәржемәсе булып та килештерер ине. Байтаҡ йылдар ҡала мөхитендә йәшәгәндән һуң, сирек быуат элек, ата-бабалар нигеҙенә ҡайтып төпләнде. Ҙур, иркен өй һалып сыҡты. Атайым ул ваҡытта яңы ғына пенсияға сыҡҡайны, агроном булып эшләгәндәре, ялан ҡыҙырып, өйгә лә төшмәй йөрөгән саҡтары артта ҡалғайны. Икәүләп брустан бура бураныйлар. Атайым: "Вәт әй, ҡартайған көндө бура бурарға өйрәндем, беләм икән дә, кем уйҙаған", - тип сикһеҙ ҡыуана ине. Өмәләрһеҙ ҙә булманы, әлбиттә: боронғоса күрше-күлән, туғандар ярҙам иттеләр. Иҙән-түшәм түшәүҙе, түбәгә тупраҡ һалыу, стеналарҙы штукатурлау, өйҙөң тышҡы яҡ стеналарын йышылған таҡта менән ҡаплау эштәрен, фронтонды, тәҙрә йөҙлөктәрен һырлап эшләү, кәртә-ҡура, мунса төҙөүҙе - барыһын да үҙенең булдыҡлы ҡулдары һәм ныҡышмалылығы арҡаһында атҡарҙы минең алтын ҡуллы энем. Башта мотоциклы бар ине. Бер аҙҙан машина алды. Хәҙер инде тәгәрмәсле тракторының да изгелеген күрә. Саптырғыс тағып, бесән саба, трактор менән бесән йыя.

Энемдең һөнәрҙәрен һанап ултырманым, әммә уны етмеш төрлө һөнәр эйәһе тип әйтә алам. Балалары ла күп: ике ҡыҙы, өс улы бар. Тимәк... Ысын ир-егет икәнен иҫбат итеп, өй һалды, ул-ҡыҙҙар ҙа үҫтерә. Ә ағас ултыртҡанмы, тип һорарһығыҙ. Беҙҙең яҡта, урманлы-таулы ерҙә, мәктәп йылдарынан бирле һәр бер бала ҡарағай һәм шыршы ултыртырға йөрөй. Был изге эштә Әғзәм дә ҡатнашмай ҡалманы, әлбиттә. Салауат районындағы Башҡорт Илсекәйе төп мәктәбендә тиҫтә йылдан ашыу директор булып эшләгән дәүерендә лә, иманым камил, мәктәп уҡыусылары менән урман хужалығы планы буйынса ылыҫ үҫентеләрен сәсеүҙә, мәктәп тирәләй емеш ағастары ултыртыуҙа ең һыҙғанып ҡатнашты. Үҙенең ихата баҡсаһында ла ҡарағат һәм башҡа емеш ағастары үҫтерәләр һәм тәрбиәләй улар ғаиләһе менән.

Бына шулай, ил аҡһаҡалы йәшенә етеп килгән энем хаҡында йылы һүҙҙәр яҙырға ине минең ниәтем. Атайым әйтмешләй, олоһона ла, кесеһенә лә маҡтау килешә. Маҡтарлыҡ булһа, маҡтау ҙа бик кәрәк кешегә. Хуплауға лайыҡ эштәр башҡарайыҡ, башҡорттарым! Бер-беребеҙҙе аяйыҡ, яҡын кешебеҙҙең, әлегә тиклем белмәгән милләттәшебеҙҙең дә хатта, яҡшы холҡон өлгө итеп, уның кеүек булырға тырышып, эскерһеҙ тойғолар кисереп йәшәйек.

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА,**
**юғары категориялы башҡорт**
**теле уҡытыусыһы.**
**Өфө ҡалаһы.**

**РЕДАКЦИЯНАН...**

**Быйыл республикала иғлан ителгән "Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы" йөкмәткеһенә ярашлы, гәзитебеҙҙә "Етмеш һөнәрле ир-ат" тигән яңы конкурс иғлан итеүебеҙ тураһында белдергәйнек инде. Был рубрикабыҙҙа ир-аттарыбыҙ белгән һөнәрҙәре һәм уларҙы үҙләштереүгә бәйле ҡыҙыҡлы тәьҫораттары, хәтирәләре менән уртаҡлашыр, тигән өмөттәбеҙ. Конкурсҡа йомғаҡ йыл аҙағында яһаласаҡ. Иң ҡыҙыҡлы һәм фәһемле мәҡәлә авторҙарын иҫтәлекле бүләктәр көтә. Хаттар көтәбеҙ.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# МИҒРАЖ КИСЕ



**Миғраж тип Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең Аллаһы Тәғәлә янына күтәрелеүен әйтәләр. Мосолман ғалимдары иҫәпләүенсә, Миғраж 621-се йылда Рәжәб айының егерме бишенән егерме алтыһына ҡарай төндә (15 июндән 16 июнгә ҡарай төндә) була.**

Риүәйәттәрҙә хәбәр ителеүенсә, тәүҙә Бәйғәмбәр Мәккәләге Харам мәсетенә һәм Иерусалимдағы Әл-Аҡса мәсеттәренә йүнәлә. Әл-Аҡса мәсетендә бөтә бәйғәмбәрҙәргә имам булып намаҙ ҡылғандан һуң, Рәсүлуллаһ Ябраил ғәләйһиссәләм менән күккә күтәрелә. Күктең һәр бер ҡатында бәйғәмбәрҙәр менән осрашҡандан һуң, Мөхәммәт Бәйғәмбәр яңғыҙы Аллаһы Тәғәлә менән туранан-тура әңгәмәгә лайыҡ була. Әңгәмә ваҡытында Мөхәммәт бәйғәмбәргә күп серҙәр асыла. Аллаһы Тәғәлә исемдәрен һәм сифаттарын аңлау ғилеме бирелә. Мосолмандарға көнөнә биш тапҡыр намаҙ ҡылыу фарыз ителә. Йәннәт һәм йәһәннәм эйәләрен айырыусы сифаттар күрһәтелә.

Ислам дошмандарының яуыҙлыҡтары бар сиктәрҙе үткән ваҡытта ла Аллаһы Тәғәләгә ҡарата һөйөүен һәм ихласлығын юғалтмаған Бәйғәмбәргә оло бүләк була ул Миғраж. Ошо серле төндә булған сәйәхәт - Исра һәм күккә күтәрелеү - Миғраж хаҡында Ҡөрьән Кәримдә айырым сүрәлә һәм бик күп хәҙистәрҙә бәйән ителә. Миғражға ышаныу Ислам тәғлиматтенең төп принциптары рәтенә инә. Миғраждың икенсе көнөндә Бәйғәмбәр сәхәбәләренә төндә булған ваҡиғалар тураһында һөйләй. Быны ишетеп ҡалған кафырҙар һәм монафиҡтар уны аҡылдан яҙған тип ғәйепләй башлай. Асыҡ дәлилдәрҙе ҡабул итмәйҙәр. Шул ваҡытта кешеләр халыҡ араһында ҙур абруй ҡаҙанған Әбүбәкер янына килә. Уларҙы тыңлағандан һуң был бөйөк сәхәбә үҙенең бер ҡасан да Бәйғәмбәрҙән алдаҡ һүҙ ишетмәүен һәм уның һәр саҡ хаҡ һөйләүен әйтә. Уның һүҙҙәре Ислам дошмандарының ауыҙын яба, имандары нығынып етмәгән яңы мосолмандарҙың йөрәгенән барлыҡ шиктәрҙе алып ташлай.

Миғражда намаҙҙан тыш мөһим дини ҡанундар ҙа еткерелә. Был ҡанундарҙа кешеләр араһында үҙ-ара ярҙамдың мөһимлеге сағылыш таба. Ризыҡ биреүсе - ул Аллаһ, һәр кем был донъяға үҙ ризығы менән килә, шуға ла аслыҡтан ҡурҡып, үҙ балаларыңды үлтереү, кеше ғүмерен өҙөү, етемдәрҙең өлөшөн үҙләштереү ҡәтғи рәүештә тыйыла. Зина ҡылыуҙың үлемесле яман эш һәм насар юл булыуы еткерелә. Кешеләр араһында үҙ-ара ышаныс бөтмәһен өсөн вәғәҙә һәм килешеүҙәрҙе теүәл үтәү, сауҙала намыҫлы эш итеү мөһимлеге билдәләнә. Белемең булмаған эштәргә ҡыҫылыу һәм һөйләү, тәкәбберлектән йыраҡ тороу мөһимлеге аманат ителә.

Миғраж киңерәк мәғәнәлә Аллаһ ҡолоноң ихласлыҡта иң юғары нөктәгә етеүен дә аңлата. Һәр бәйғәмбәрҙең үҙенең Миғражы була, әммә иң камил Миғраж Мөхәммәт бәйғәмбәрҙеке һанала. Ябай мосолмандарҙың Миғражы - намаҙ. Тап сәждәгә киткән ваҡытында мөъмин Аллаһы Тәғәләгә яҡынлаша.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Каналдар тураһында

**Әгәр үҙегеҙҙе һәм башҡаларҙы һауыҡтырыу теләге тыуһа, космоэнергетика һәм каналдар тураһында өҫтәмә мәғлүмәт.**

Уҡыу барышында бағышлау булған беренсе канал - Фарун-Будда. Ул универсаль канал, бөтөн ауырыуҙарҙы ла тиерлек дауалай ала. Тиҙ арала иҫтән языуҙан сығарырға һәләтле, аураны тигеҙләй һәм ҙурайта. Бағышлау булған икенсе канал - Фираст. Бик ҡеүәтле, көслә, таҙартыусы канал. Күҙ тейеүҙән, боҙомдан, ҡарғыштан, сихырҙан, ҡайтарманан, зомбилаштырыуҙан, кодлаштырыуҙан һ.б. кире тәьҫирҙәрҙән, шулай уҡ биреләрҙән таҙарта.

Өсөнсө канал Зевс тип атала. Был канал чакраларҙы нормаға килтерә, ауранi таҙарта.

Артабан канал-белгестәр китә. Мәҫәлән, күҙҙе, тиреңе, аллергияны дауалаусы, шулай уҡ эндокрин системаһын нормаға килтереүсе, иммунитетты нығытыусы, ҡатын-ҡыҙҙы, ир-атты йәшәртеүсе (улар кеше таҙарынғандан һәм эндокрин системаһы тәртипкә килгәндән һуң ҡулланыла), таштарҙы онтаусы, онкологиянан дауалаусы, ҡан составын яҡшыртыусы каналдар бар.

Каналдар тәьҫирендә бөтөн ағзаларға һәм системаларға комплексы йоғонто яһала - тотош организм һауыға, кеше ниндәй генә проблемалар менән килмәһен, улар барыһы ла юғала. Шуға күрә был методика популярлаша бара. Һәм был барыһы ла ҡуллана ала торған методика. Бер нисә көн эсендә үҙенә лә, пациентҡа ла зыян килтермәйенсә генә дауаларға өйрәнергә мөмкин. Артабан инде даими рәүештә камиллашырға, тирбәлешендә арттырырға, махсус әҙәбиәт уҡырға, практика үтергә, өҫтәмә белем алырға һәм семинарҙарҙа уҡырға кәрәк.

Теләүселәр Космоэнергетика һәм махсус психология институты ректоры Эмиль Багировта (Мәскәү ҡалаһы) йәки уның уҡыусыларында, космоэнергетика магистрҙарында уҡый һәм каналдарға бағышлау ала. Бында бағышлау һөҙөмтәһе бағышлаусының һәм бағышланыусының тирбәлеш йышлығына нығ бәйле. Шуға күрә белем алғанға тиклем ауранi нығклап таҙартырҙа кәрәк! Шуны онотмағыҙ - был бик ауыр һәм бик яуаплы эш. Ә теләге булған һәр кем уҡырға мөмкин. Һәр саҡ иҫегеҙҙә тотоғоҙ: Һеҙ түгел, ә Аллаһы Тәғәлә дауалай! Шуға күрә ниндәй генә һоҡланғыс һөҙөмтәләрегеҙ булмаһын, тәнауығыҙҙы күтәрмәгеҙ. Тимәк, пациенттарығыҙ Аллаһы Тәғәлә алдында үҙҙәренең проблемалары һәм бәхетһеҙлектәренән арыныуға лайыҡ булған. Ә һеҙ быға ярҙам иткәнһегеҙ.

Шуны онотмағыҙ: космоэнергетика панацея түгел! Әгәр кеше тәбиғәттә һирәк була, күп ашай, аҙ хәрәкәтләнә, буш ваҡытын телевизор алдында үткәрә, тәмәке тарта, спиртлы эсемлектәр эсә, услап-услап дарыу эсә, әрләшә, бабаҫырҙар йөрәтә, тормошҡа үпкәләгән һәм уға дәғүәләре бар, һәр саҡ ҡурҡып йәшәй икән, ул кешенең сәләмәтлеге ниндәй булырға тейеш? Әгәр кеше үҙе үҙгәрергә теләмәһә, дауаланыу йә ваҡытлыса, йә өләшләтә генә буласаҡ, быны һәр саҡ иҫтә тотоу зарур.Сәләмәт булыу өсөн эске генә түгел, тышҡы донъя менән татыулыҡта, тыныслыҡта, мөхәббәттә йәшәргә кәрәк. Уйҙарығыҙ ҙа, ниәттәрегеҙ ҙә изге булһын!

**Беҙ был донъяға камиллыҡҡа, оҫталыҡҡа һәм зирәклеккә, аҡылға эйә булырға, үҙебеҙҙең илаһилығыбыҙҙы танырға килгәнбеҙ. Беҙ был донъяла ысын зиһен асыҡлығы һәм рухи азатлыҡ табыр, барлыҡ пландарҙа ла сикләнмәгән булыр, үҙебеҙҙең хәҡиҡәтебеҙҙе әүҙемләштереү өсөн килгәнбеҙ. Беҙҙең йәнебеҙҙең ихтыяры шундай. Әгәр һеҙ илаһи тәғлимәт, илаһи ҡанундар буйынса йәшәһәгеҙ, Аллаһы Тәғәләне, үҙегеҙҙе, пациенттарығыҙҙы яратһағыҙ, һөҙөмтәләрегеҙ иҫ киткес буласаҡ!**

Рауфан МОРТАЗИН.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Маҡсаттарҙы ҡуйыу сере

**3.** Маҡсатығыҙ даими рәүештә аңығыҙҙы биләп алһын. Исаак Ньютондан уның феноменаль уңыштарының сере тураһында һораған, ул, башҡаса бер нәмә тураһында ла уйламаным, тип яуаплаған. Маҡсатыңды тормошҡа ашырыу хаҡында өҙлөкһөҙ уйлау уның тормошҡа ашыуына шикһеҙ ышаныс тыуҙыра. Шулай уҡ бер ваҡытта ла иҫкермәгән принципты ла иҫегеҙҙән сығармағыҙ: һеҙҙең эске донъяғыҙ тышҡы донъяғыҙҙы билдәләй. Шуға күрә көн һайын иртән маҡсатығыҙҙы ҡыҫҡырып һанап сығығыҙ. Кисен 10 минутығыҙҙы нимә эшләргә теләүегеҙҙе күҙаллауға бүлегеҙ. Уйығыҙҙа ғына ғүмерегеҙҙең һуңында ғорурлыҡ менән нимәгә ынтылғанығыҙ, шуға барып еткәнегеҙҙе тойоу шатлығын һәм бәхетен кисереүегеҙҙе һүрәтләгеҙ.

**4.** Баҫымды үҙ файҙағыҙға файҙаланығыҙ. Баҫым һәр саҡта ла насар түгел. Маҡсаттарҙың күпселегенең тормошҡа ашмай ҡалыуының төп сәбәбе шул: уларҙы юл ситенә икенсе көндәлек мәшәҡәттәр, башҡа бурыстар этәреп сығара. Әгәр һеҙҙе маҡсатығыҙға барған юлда ниндәйҙер баҫым көтә икән, бер нәмәгә ҡарамайынса алға барасаҡһығыҙ һәм ошо йүнәлештә көсәргәнешлерәк эшләйәсәкһегеҙ. Һеҙ кеше алдында маҡсаттарығыҙҙы ҡыҫҡырып әйтеп, үҙ-үҙегеҙгә баҫым яһай алаһығыҙ. Мәҫәлән, артыҡ ауырлыҡтан арынам, иртән йүгерә башлайым һ.б.

**5.** Фекерҙәштәрегеҙҙе үҙ эргәгеҙгә йыйығыҙ. Үҙ тирәгеҙгә мөмкин тиклем күберәк арҡаҙаштар туплағыҙ. Әгәр марафонда ҡатнашырға ҡарар итһәгеҙ, йүгереүселәр клубына инегеҙ. Әгәр финанс бөйөклөгөнә өлгәшергә теләһәгеҙ, эшҡыуарҙар төркөмөн ойоштороп, һәр аҙна осрашығыҙ, ниндәй стратегияның эшләүе, ҡайһыһы эшләмәүе буйынса фекер алышығыҙ. Шундай төркөм ойоштороп, һеҙ маҡсатығыҙға иғтибарҙы яҡшыраҡ туплай, дәртләнеберәк эшләй алаcаҡһығыҙ.

**6.** 21 ҡағиҙәһен онотмағыҙ. Әгәр һеҙ нимәнелер 21 көн дауамында эшләйһегеҙ икән, уны көндәлек ғәҙәткә әйләндереү мөмкинлегегеҙ бар. Ныҡышмалылыҡҡа һәм даимилыҡҡа ҙур көс тупланған. Насар ғәҙәттәрҙән арынырға теләһәгеҙ, тәү сиратта үҙегеҙҙә тәртип тәрбиәләгеҙ. Әгәр тәмәке тартыуҙы ташларға теләйһегеҙ икән, 21 көн тартмай торогоҙ. Сэмюэль Джонсон әйткәнсә, "бөйөк эштәр көс иҫәбенә түгел, ә ныҡышмалылыҡ иҫәбенә эшләнә".

**7.** Тормоштан ҡәнәғәтлек алығыҙ һәм үҙегеҙҙе бүләкләгеҙ. "Сәйәхәттән ҡәнәғәтлек алығыҙ", ти Көнсығыш аҡылы. Бәләкәй генә маҡсатығыҙға өлгәшкәндән һуң да үҙегеҙҙе ҡотлағыҙ. Бәләкәй еңеүҙәр ҙур еңеүҙәргә килтерә. Әгәр ҡуйған маҡсатығыҙға билдәләгән ваҡытта өлгәшә алмаһағыҙ, үҙегеҙҙе ғәйепләмәгеҙ. Һығылмалы булa белегеҙ. Икенсе алым ҡулланып ҡарағыҙ, әммә бер ваҡытта ла, әгәр маҡсатығыҙ уға өлгәшеүгә лайыҡ икән, ярты юлда туҡтамағыҙ. Маҡсат ҡуйып, һеҙ ҡеүәтле тормош потенциалын ирекҡә сығараһығыҙ һәм күңел төбөндә йылы ҡуҙ булып баҙлап ятҡан хыялығыҙ менән йәшәй башлаясаҡһығыҙ.

Робин ШАРМА.



## 18 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать"
17.00 "Жди меня"
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Счастливый билет". Сериал
22.35 "Замри, умри, вокресни"
23.25 Ночные новости
23.40 "С ног на голову"
00.40 Чемпионат Европы по футболу-2012. Сборная Италии - сборная Ирландии
02.45, 03.05 "Без предела". Триллер
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 66-я серия
15.45 "Кровинушка", 91-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 13-я и 14-я серии
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир"
21.30 "Отдел С.С.С.Р.", 1-я и 2-я серии
23.20 "Дежурный по стране"
00.20 "Вести+"
00.40 "В Париж!" Драма
0.50 Футбол. Чемпионат Европы. Хорватия - Испания

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный". "Случайный разговор". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор за неделю. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Паутина-2". Кодекс воровской чести". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Шеф". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "Центр помощи "Анастасия"
02.30 "В зоне особого риска"
03.00 "Рублевка. Live". Сериал
04.55 "Адвокат". "Дьявол кроется в деталях"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00 Новости недели**
**10.30 "Семер"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 Новости недели (на русск. яз.)**
**12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**12.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Субботний диалог"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Забытые войны"**
**17.15 "Надо знать!"**
**18.45 "Бахетнама"**
**19.45 "Еду я в деревню"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.40 "Пора разобраться"**
**23.00 "Послесловие"**
**23.15 "Следопыт"**
**23.45 "Эскадрилья "Лафайет"**

## 19 ИЮНЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Счастливый билет". Сериал
22.30 "Первый класс" с Иваном Охлобыстиным"
23.30 "Вечерний Ургант"
00.00 Ночные новости
00.25 "Луковые новости". Сатирическая комедия
02.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
02.45 Чемпионат Европы по футболу-2012. Сборная Швеции - сборная Франции

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 67-я серия
15.45 "Кровинушка", 92-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Сваты-4", 15-я и 16-я серии
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир"
21.30 "Отдел С.С.С.Р.", 3-я серия
22.25 "Любовь до востребования". Мелодрама
00.10 "Вести+"
00.30 Футбол. Чемпионат Европы. Англия - Украина
02.45 "Профилактика"
03.55 "Честный детектив"
04.25 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный". "Капкан на охотника". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание, розыск!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Паутина-2". "Кодекс воровской чести". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Шеф". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Глухарь". Сериал"
01.35 "Квартирный вопрос"
02.35 "Чудо-люди"
03.10 "Рублевка. Live". Сериал
05.00 "Адвокат". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30 "Каникулы НЕстрогого режима"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Башкорт йыры-2012"**
**14.15 "Весело живем"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Шэп арба"**
**16.00 "Байтус"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Забытые войны"**
**17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.45 "Байык-2012"**
**19.45 "Святой очаг"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Действующие лица"**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**23.45 "Эскадрилья "Лафайет"**

## 20 ИЮНЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Счастливый билет". Сериал
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Вечерний Ургант"
00.00 Ночные новости
00.20 "Роберт Рождественский. "Не думай о секундах свысока..."
01.25 "Мужчина по вызову: Европейский Жиголо"
03.00 Новости
03.05 "Погребенные заживо"
04.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 68-я серия
15.45 "Кровинушка", 93-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Объект 11", 1-я и 2-я серии
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир"
21.30 "Отдел С.С.С.Р.", 4-я и 5-я серии
23.25 "Два залпа по конструктору. Драма "катюши"
00.25 "Вести+"
00.45 "Профилактика"
01.55 "Молодой Эйнштейн". Комедия
03.40 "Закон и порядок"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный". "Последняя ставка". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание, розыск!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Паутина-3". "Ваш выход, маэстро". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Шеф". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Глухарь". Сериал"
01.35 "Дачный ответ"
02.35 "Чудо-люди"
03.105 "Рублевка. Live". Сериал
04.55 "Адвокат". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30 "Шатлык йыры"**
**10.45 "Шэп арба"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Тэмле"**
**14.15 "Весело живем"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Гэлэмэт донья"**
**16.15 "Борсак"**
**16.45 "Забытые войны"**
**18.45 "Байык-2012"**
**19.45 "Алтын тирмэ"**
**19.45 "Сделано в "Тамыре"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Историческая среда"**
**23.00 КВН. РБ. 1/8 финала ЦЛ "Поволжье"**

## 21 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Счастливый билет", 8-я, закл. серия. Сериал
22.35 "Пять миллионов за сердце"
23.30 "Вечерний Ургант"
00.00 Ночные новости
00.20 "Разомкнутые объятия". Драма
02.45, 03.05 "Поединки: Вербовщик"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 69-я серия
15.45 "Кровинушка", 94-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Объект 11", 3-я и 4-я серии
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир"
21.30 "Отдел С.С.С.Р.", 6-я серия
22.25 "Невеста на заказ". Мелодрама
00.10 "Вести+"
00.30 Футбол. Чемпионат Европы. 1/4 финала
02.45 "Профилактика"
03.55 "Комната смеха"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Литейный". "Страшные игры". Криминальный сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Паутина-3". "Ваш выход, маэстро". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Шеф". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Последний герой". Памяти Виктора Цоя
00.55 "Танец живота". Мелодрама
03.00 "Рублевка. Live". Сериал
04.55 "Адвокат". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30 "Царь горы"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 "Тэмле"**
**12.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Мелодии лета". Концерт**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Йырлы кэрэз"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Забытые войны"**
**18.45 "Пора разобраться"**
**19.45 "Волшебный курай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Глас закона"**
**23.00 "Уфимская волна-2012"**

## 22 ИЮНЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Девичья охота". Сериал
16.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 "Поле чудес"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Цой - "Кино"
22.25 Виктор Цой и группа "Кино"
23.40 Открытие 34-го Московского международного кинофестиваля
00.20 "Пророк". Драма
03.15 "Прочисть мозги"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "Мусульмане"
09.10 "Ауаз"
09.55 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь", 70-я серия
15.45 "Кровинушка", 95-я серия. Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Объект 11", 5-я и 6-я серии
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир"
21.30 "Отдел С.С.С.Р.", 7-я 8-я серии
23.25 "Военная разведка. Первый удар". Военная драма
01.40 "Моя планета. Путешествие по России"
04.35 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.40 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.35 "Развод по-русски"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Служу Советскому Союзу". Военная драма
21.35 "Морские дьяволы". Сериал
23.30 "22 июня. Роковые решения"
01.25 "Обратная тяга". Остросюжетный фильм
03.55 "Рублевка. Live". Сериал
04.50 "Адвокат". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15, 18.45 "Учим башкирский язык"**
**10.30 "Бауырхак"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15, 18.00 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 19.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.30, 14.30, 18.30, 20.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.30 "Каникулы НЕстрогого режима"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Сулпылар"**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Забытые войны"**
**19.00 "Из фондов ТВ. "За родную землю"**
**19.45 "Йома"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Здоровое решение"**
**22.00 "День памяти и скорби"**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**23.45 "Муз-базар"**
**00.15 "Дарман"**

## 23 ИЮНЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.35, 06.10 "Вий"
06.00 Новости
07.10 "Играй, гармонь любимая!"
08.00 "Дисней-клуб"
08.25 "Смешарики. Пин-код"
08.35 "Умницы и умники". Финал
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Наталья Варлей. Скучно без Шурика"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Освобождение", 5-й фильм. Военная киноэпопея
13.40 "Тени исчезают в полдень"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Притяжение". Мелодрама
20.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
21.00 "Время"
21.20 "Жестокие игры"
22.50 "Друг невесты". Романтическая комедия
00.45 "Последний урок"
02.30 "Век помрачения"
04.30 "Фальшивые биографии"
05.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.05 "Неисправимый лгун"
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести - Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Газпром"
10.40 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.25 "Заяц, жаренный по-Берлински". Комедийный сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести - Башкортостан"
14.30 "Заяц, жаренный по-Берлински". Продолжение
17.00 "Субботний вечер"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.35 "Васильки для Василисы". Мелодрама
22.30 "Казаки-разбойники"
00.30 Футбол. Чемпионат Европы. 1/4 финала
02.45 "Дорога, ведущая к счастью". Мелодрама
04.45 "Комната смеха"

### НТВ
05.40 "Супруги". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.10 "Казнокрады"
15.05 "Таинственная Россия: Камчатка. Древние технологии работают до сих пор?"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Коммуналка". Остросюжетный фильм
00.45 "Час Волкова". Сериал
02.50 "Рублевка. Live"
04.45 "Адвокат". Сериал

### БСТ
**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Мулан"**
**09.30 "Взгляд без слов"**
**09.45, 12.45 "Надо знать!"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Замандаштар"**
**11.45, 19.00 "Весело живем"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30 Новости**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.30 "Здоровое решение"**
**14.00 Концерт**
**16.00 "Третий звонок". Г. Шафиков. "Черный иноходец". Спектакль**
**18.00 "Башкортостан в сердце моем". Рамиль Кильмаматов"**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.15 "Хазина"**
**19.45 "Башкорттар"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Дарман"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Ночной клуб "Суббота"**
**22.45 Башкорт йыры" представляет..."**

## 24 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Аты-баты, шли солдаты..."
08.00 "Служу Отчизне!"
08.35 "Дисней-клуб"
09.00 "Смешарики. Пин-код"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Сергей Филиппов. "Есть ли жизнь на Марсе?"
13.20 "12 стульев", 2 серии
16.30 "Гарфилд: история двух кошечек". Комедия
17.55 "Развод. Я тебе ничего не отдам..."
19.00 "Желаю Вам..." К юбилею Роберта Рождественского. Концерт
21.00 "Воскресное "Время"
22.10 "Мульт личности"
22.40 "На грани"
00.40 Чемпионат Европы по футболу-2012. 1/4 финала
02.45 "Власть страха". Триллер

### РОССИЯ 1
05.50 "Карусель". Комедия
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Заяц, жаренный по-Берлински". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Заяц, жаренный по-Берлински". Продолжение
15.40 "Смеяться разрешается"
17.20 "Рассмеши комика"
18.05 "Я счастливая!" Мелодрама
20.15 "Вести недели"
21.05 "Паутинка бабьего лета". Мелодрама
23.05 "Альпинист". Драма
01.00 "Девять признаков измены". Лирическая комедия
03.00 "Комната смеха"
04.00 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.40 "Супруги". Сериал
07.25 "Живут же люди!"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Своя игра"
14.10 "Казнокрады"
15.05 "Таинственная Россия: Якутия. Живые мамонты?"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
22.00 "Анастасия Волочкова. Моя исповедь"
23.00 "НТВшники"
00.05 "Бес", 2 серии. Криминальная драма
02.05 "Кремлевские похороны"
03.00 "Рублевка. Live". Сериал
04.55 "Адвокат". Сериал

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.45 "Взгляд без слов"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Автограф. Т. Юлдашева"**
**10.00 "Бауырхак"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.30 "Семэр"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Шэп арба"**
**11.15 "Байтус"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.30 Новости недели**
**13.00 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Я люблю тебя, жизнь"**
**16.00 "Историческая среда"**
**16.30 "Замандаштар"**
**17.00 "Дорога к храму"**
**17.30 "Орнамент"**
**18.00 "Салауат йыйыны-2012"**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**18.00 "Весело живем"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Новости спорта"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык-2012"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 "Кош юлы"**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# БОРОДИНО ҺУҒЫШЫ...

## Ҡырмыҫҡалы яланында



(Башы 7-се биттә).

**Башҡортостанға ошо көндәрҙә эш сәфәре менән Төркиәнең Истамбул ҡалаһынан ҙур делегация килгәйне. Сәфәр саралары сиктәрендә ҡунаҡтар Ҡырмыҫҡалы районында үткән һабантуйҙа ла ҡатнашты. Делегация етәксеһе Истамбул ҡалаһының Фәтих районы вице-мэры Аднан Гүләр республика, һабантуй хаҡындағы тәьҫораттары менән бүлеште:**

- Һабантуйҙа булып, башҡорт халҡының сәнғәтен, йолаларын күрҙек, башҡорт халҡының батырлығын, ҡаһарманлығын, риүәйәттәрен, тарихын реконструкциялаған тамашаны ҡарап һоҡландыҡ. Был башҡорт халҡының тамырҙары боронғо, быуаттар төпкөлөнә барып тоташыуына тағы ла бер дәлил. Башҡа бер халыҡ та башҡорттар кеүек бер үк ваҡытта шундай ҡаһарман да, ҡунаҡсыл да була алмаҫ, моғайын. Беҙ башҡорттар менән ҡәрҙәш халыҡтар. Башҡортостанды күреп, ундағы сараларҙы, тамашаларҙы ҡарағандан һуң туғанлыҡ, ҡәрҙәшлек ептәренең тамырҙарының тәрәнлегенә тағы ла ныҡыраҡ инандыҡ.

Беҙҙең уртаҡлаша торған тәжрибәләребеҙ, бер-беребеҙгә ярҙам итә һәм өлгө була алырҙай башланғыстарыбыҙ бар. Хеҙмәттәшлек ептәребеҙ киләсәктә мәғариф һәм башҡа өлкәләрҙә тағы ла нығыныр, яңы килешеүҙәр, проекттарға нигеҙ һалыныр, тип ышанғы килә. Ысын йөрәктән беҙ башҡорт халҡына, уның етәкселәренә рәхмәтлебеҙ. Үҙегеҙҙә булған ихласлыҡты, ҡунаҡсыллыҡты бер ҡасан да юғалтмауығыҙҙы теләйбеҙ.

**Әйтелгәндәргә Силәбе өлкәһенең Сыбаркүл районынан килгән Сергей Степаненко исемле бер ҡунаҡтың уй-фекерҙәре менән һығымта яһайыҡ:**

- Тарих, ысынлап та, онотола бара. Шул иҫәптән, Рәсәй халҡының 1812 йылда француздарға ҡаршы көрәше тарихын да күптәребеҙ белмәй. Йәмғиәтебеҙ тарихты өйрәнергә атлығып та тормай шул. Мәктәптә берәй тема буйынса өйгә эш бирһәләр, бала китапханаларҙа эҙләнеп ултырамы? Китап биттәрен аҡтарамы? Юҡ, ул кәрәк теманы бер нисә минут эсендә интернетта табып алып, уны үҡып та тормайынса ғына ҡағыҙға сығарып, реферат итеп тапшыра. Бар эҙләнеүҙәр, бар тарих ошо. Шуға күрә лә, дәүләтебеҙ тарихының данлыҡлы биттәрен, ул биттәрҙе яҙған бөйөк кешеләребеҙҙең исемдәрен йәш быуынға еткереү өсөн төрлө яҡлап булышлыҡ итергә кәрәк. Бөгөн федераль каналдарыбыҙ аша тарих яҡтыртыламы? Юҡ тиерлек. 1812 йылғы Ватан һуғышы хаҡында әйтеп торапһы ла түгел. Был - беренсенән. Икенсенән, 1812 йылғы Ватан һуғышы, 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы тураһында фильмдар ҡурһәтелә икән, уларҙа геройҙар кемдәр? Рәсәй халыҡтарымы, әллә рус халҡы ғынамы? Ысынлап та, телевизор ҡараһаң, Рәсәйҙә урыҫтарҙан башҡа халыҡ юҡ микән ни, тигән уйға киләһең. Урыҫтар менән бергә ошо яуҙарҙа көрәшкән башҡа халыҡтар бөтөнләй телдән төшөп ҡала. Күп милләтле дәүләттә тап уртаҡ еңеү фактына баҫым яһалырға тейеш. Беҙҙең Рәсәй халыҡтары араһындағы дуҫлыҡ ауыр мәлдәрҙә сынығыу үткән. Башҡорттар был йәһәттән бигерәк тә тоғролоҡо менән айырылып торған, ауыр мәлдәрҙә бер ҡасан да Рәсәйҙе ташламаған. Бергә булған. Бергә көрәшкән. Әммә ошо хаҡта минең милләттәштәремдең онотоуы ғына аптырата мине. Был һабантуйҙа йөрөгәндә ошолар хаҡында тағы бер тапҡыр әсенеп уйландым...

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# АҢКУТИНЛАНМА,

## иҫһеҙ кешеләй ни...

**Әсәйемдең, ҡәртәсәйемдең ауыҙынан ишеткән һүҙҙәрҙе башҡа яҡтарҙа ишеткәнем булмаған, яҙып ебәрергә булдым. Ауылда тыуып үҫкән балалар ҡалаға уҡырға китәләр ҙә, өләсәйҙәренең телен онотолар. Дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәр менән һөйләшә башлайҙар. Шул рәүешле телебеҙ ярлылана, онотола.**

**Ҡыршауай** - тыңламаған, ҡырыҫ кешегә әйтәләр.

**Мәтүәс** - бер ауылда иҫкә бер төрләрәк Мөхәмәҙей тигән кеше булған. Уны "мәтүәс" тип үсекләгәндәр. Шунан алып иҫәрерәк кешегә "мәтүәс" тип әйтәләр.

**Корогор** - әрләү һүҙе. Берәй кешегә асыуланһалар, шулай тип әйтәләр.

**Коромағыр** - ғәҙәттә, балаларына, яҡындарына йәндәре көйгәндә шулай тип әйтәләр.

**Шаҡшы** - ҡулсыр, боҙоҡҡа тейешкән бала-сағаны шулай тип әрләйҙәр.

**Бәйнәт** - өлкәндәрҙе ыҙалатып, мажаларына тейеп йөрөгән балаларҙы шулай тип әрләйҙәр.

**Болапар** - эшлекһеҙ, донъяһын йыя белмәгән кешене шулай атайҙар.

**Бигәләш** - ныҡ шаян, ярһыу кеше.

**Дыуамал** - ҡурҡыу белмәҫ, алдына кеше сығармаған, уйлап тормай эшләгән кешене шулай тип йөрөтәләр.

**Лапшайыу** - киңәйеү, йәйелеү, иркенәйеү. Мәсәлән, итегем лапшайған, лапшайып ултыра.

**Ылдый атлау** - ыңғай атлау.

**Шул яҡҡа ылдыйланы** - шул яҡҡа ыңғайланы.

**Ҡыршый** - кеше менән аралашмаған, кеше яратмаған кешегә әйтәләр.

**Старай бире** - кешене өйөнә индермәгән, бер кем менән дә ҡатышмай йәшәгән кешегә әйтәләр.

**Тутә юл** - һирәк йөрөлгән, үлән үҫкән иҫке юл.

**Ҡупырыу, ҡупырыҡ кеше** - маҡтаныу, маҡтансыҡ кеше.

**Һипенде** - тартынды.

**Көшмөрәү** - һыуланып, өшөп кәкерәйеү.

**Алканшаҡ** - эшләмәй, уйындан, шаярыуҙан башҡаны белмәгән кешегә әйтәләр.

**Аңшара** - аңра.

**Аңкутин** - иҫәр, иҫһеҙ.

**Бейбаштаҡ** - тәртипһеҙ, тыңлауһыҙ кешегә әйтәләр.

**Утыҡҡан, утығыу** - яңы тыуған бала йә берәй йән эйәһе әҙерәк ҙурайһа, шулай тип әйтәләр.

**Рүзилә ИҪӘНБАЕВА.**
**Йылайыр районы.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАШЫҢ ЭШЛӘМӘҺӘ...

## аяғыңа ауырлыҡ төшә

Баҙ ҡаҙыһаң, икене ҡаҙы - берене үҙеңә булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөтөн ҡылыҡтарың үҙ йәшеңә ярашлы булырға тейеш.

**(Квинт Флакк).**

Эштән һуң сәләмәт торошта ял итеү - ошонан да ҙурыраҡ көнөгәтлек булыуы мөмкинме!

**(Иммануил Кант).**

Власть - ғорурҙарҙы һәм ярһыуҙарҙы, байлыҡ ҡыйыуһыҙҙарҙы һәм баҫалҡыларҙы ылыҡтыра; быңа ни өсөн йәшлек власҡа ынтыла, ә ҡартлыҡ иһә байлыҡ алдында ялағайлана.

**(Сэмюэл Джонсон).**

Иң тәүҙә һүҙ булған, һуңынан иһә ул тапалған.

**(Станислав Лем).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер уҡыусы уҡытыусыһы янына килә һәм шулай тип мөрәжәғәт итә:**

**- Уҡытыусым, ҡайһы саҡта минең холҡом тыйып тотҡоһоҙ булып китә. Асыуҙан нисек дауаланырға була икән?**

**- Улайһа, әйҙә, миңә ул холҡоңдо күрһәт! - ти уҡытыусы.**

**- Хәҙер генә мин һеҙгә уны күрһәтә алмайым, - ти уҡыусы.**

**- Ярай, улайһа, аҙаҡ күрһәтерһең,- тип мут йылмая уҡытыусы. - Ҡасан булдыра алаһың, шунда килтереп күрһәтерһең миңә ул холҡоңдо...**

**- Мин уны һеҙгә килтереп күрһәтә алмайым, - ти уҡыусы аптырап. - Ул бит миңә көтмәгәндә килә. Һеҙгә килтереп еткергәнсе, ул бит юҡҡа сыға...**

**- Улай булғас, асыу һинең айырып алғыһыҙ холоҡ үҙенсәлеген түгел, - ти уҡытыусы. - Әгәр ҙә ул һинең холҡоң икән, уны теләгән ваҡытта миңә күрһәтә алыр инең. Һин тыуғанда ул һиндә булмаған. Тимәк, ул һинеке түгел, ул ситтән килгән холоҡ. Шуның өсөн асыу йөрәгеңә килеп инеү менән таяҡ ал да уны туҡма, һинән ҡасып киткәнсе туҡма уны - минең кәңәшем шул...**

**...Ысынлап та, асыуығыҙ килһә, өйҙән сығығыҙ ҙа уны ете тапҡыр уратып йүгерегеҙ. Шунан ағас төбөндәге эскәмйәгә ултырып, асыуығыҙ ҡайҙа киткәнен күҙәтегеҙ. Һиҙҙегеҙме, асыуҙы кемгәлер күрһәтеүҙән, уны тыйыуҙың йә булмаһа уны баҫтырып ҡуйыуҙың кәрәге юҡ. Асыу өсөн көстө лә, һүҙҙе лә, нервыларҙы ла әрәм итеүҙең кәрәге юҡ икәнен аң менән тойорға ғына кәрәк. Быны аңығыҙ менән тойһағыҙ, асыу һеҙҙән бөтөнләйгә китәсәк..."**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
15 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 2290